Бөтә илдәрҙең пролетарийҙары, берләшегеҙ!

ЙӘШЛЕК

1923 йылдан
башлап сыға

Шишәмбе
27
МАРТ
1990 йыл.
№ 37 (7543).

Хаҡы 3 тин.

ВЛКСМ-дың Башҡортостан Өлкә Комитеты органы

«Башҡортостан пионеры» газетаһына — 60 йыл

Республика балалар баҫмаһының тәүге һаны 1930 йылдың 12 февралендә сыға. Был ваҡытта газета «Йәш төҙөүсе» тип атала. Уның ойоштороусыһы һәм тәүге редакторы — ялҡынлы шағир М. Хәй.

«Йәш төҙөүсе» тиҙ арала балаларҙың яҡын дуҫына, кәңәшсеһенә, уҡытыусыһына әйләнә. Күптәр уның биттәрендә тәүге тапҡыр ҡәләм һынап ҡарай һәм деткорҙар булып китә. Улар — инде хәҙер атаҡлы башҡорт шағирҙары Мостай Кәрим, Ғиләмдар Рамазанов, Хәким Ғиләжев һәм башҡалар.

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында балалар газетаһы сығыуҙан туҡтап тора. Ҡабаттан ул 1959 йылда тергеҙелә һәм «Башҡортостан пионеры» тип исемләнә. Пионер баҫмаһын яңынан сығарыу өсөн күренекле шағир Ш. Бикҡол күп көс һала, ул ваҡытта бер юлы «Башҡортостан пионеры» газетаһын һәм «Пионер» журналын редакторлай.

Бөгөнгә ҡәҙәр «Башҡортостан пионеры» йәш быуынды тәрбиәләү буйынса республикала һиҙелерлек роль уйнай. Редакция коллективы айырыуса йәш хәбәрселәр менән уңышлы эш алып бара. Балалар газетаһы тәрбиәләнеүселәренең күбеһе хәҙер — күренекле яҙыусылар, журналистар, культура һәм сәнғәт эшмәкәрҙәре.

«Башҡортостан пионеры»н Силәбе, Ырымбур, Курган, Пермь, Куйбышев, Свердловск өлкәләрендә йәшәүсе башҡорт балалары ла алдыра һәм яратып уҡый.

27—30 мартта «Башҡортостан пионеры» үҙенең йәш хәбәрселәрен ошо юбилейға арналған IV республика слетына йыя.

С. ҒҮМӘРОВ.



КЕШЕ ҒҮМЕРЕ ӨСӨН КӨРӘШ БАРА...

Р. ГӘРӘЕВ фотоһы.

КПСС Өлкә Комитетының ваҡытлы бюроһы һәм Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы ҡарары

ӘҘӘБИӘТ, СӘНҒӘТ ҺӘМ АРХИТЕКТУРА ӨЛКӘҺЕНДӘГЕ ИҢ ЯҠШЫ ӘҪӘРҘӘР ӨСӨН БАШҠОРТ АССР-ының САЛАУАТ ЮЛАЕВ ИСЕМЕНДӘГЕ 1990 ЙЫЛҒЫ ДӘҮЛӘТ ПРЕМИЯЛАРЫН БИРЕҮ ТУРАҺЫНДА

КПСС Өлкә Комитетының ваҡытлы бюроһы һәм Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы, әҙәбиәт, сәнғәт һәм архитектура өлкәһендәге иң яҡшы әҫәрҙәр өсөн Башҡорт АССР-ының Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премиялары буйынса комиссияһының тәҡдимен ҡарап, ҡарар итә:

Башҡорт АССР-ының Салауат Юлаев исемендәге 1990 йылғы Дәүләт премияларын бирергә:

Ф. Ә. Ғәскәров исемендәге Башҡорт дәүләт халыҡ бейеүҙәре ансамбленә — башҡорт профессиональ-хореографик сәнғәтен үҫтереүгә һәм пропагандалауға ҙур өлөш индергәне һәм юғары башҡарыу оҫталығы өсөн;

Рәүеф Әхмәт улы Мортазинға — композитор, башҡорт симфоник музыкаһын үҫтереүгә ҙур өлөш индергәне өсөн;

Булат Зәһри улы Рафиҡовҡа — яҙыусы, 1989 йылда Башҡортостан китап нәшриәте баҫып сығарған «Ҡараһаҡал» романы өсөн.

КПСС-тың Башҡортостан Өлкә Комитетының
ваҡытлы бюроһы председателе
И. ГОРБУНОВ

Башҡорт АССР-ы Министрҙар
Советы Председателе
М. МИРҒӘЗӘМОВ

Башҡорт АССР-ы прокуратураһында

Башҡорт АССР-ы прокуратураһы 30—50-се йылдарҙа Башҡорт АССР-ында һәм Өфө ҡалаһында репрессия ҡорбандары ерләнгән урындарҙы асыҡлау буйынса эш алып бара.

Ошоға бәйле шундай ерләүҙәр тураһында берәй нимә белдәле булған бөтә граждандарҙан ул хаҡта түбәндәге адрес буйынса республика прокуратураһының тикшереү часына хәбәр итеүҙәрен һорайбыҙ:

Өфө ҡалаһы, Ленин урамы, 20/2 йәки 23-56-56; 22-37-02 телефондары буйынса шылтыратырға. Тикшереү органдары ошондай һәр хәбәргә рәхмәт әйтәсәк.

ҮҘГӘРТЕП ҠОРОУҒА ҺЫЛТАНЫП...

Йәштәрҙең торлаҡ менән тәьмин ителеү йәһәтенән ниндәй шарттарҙа булыуы күптән билдәле: ауырлыҡ менән ала улар фатирҙы. Ә хәҙер, «Торлаҡ—2000» программаһы ғәмәлгә ашырыла башлағас, хәл тағы ла ҡыйынлашты. Күрәһең, программаны тиҙерәк үтәргә тырышыпмы, күп ерҙәрҙә комсомолдарҙың, йәштәрҙең үҙ йортона, фатирына хоҡуғын туранан-тура инҡар итеү урын ала. Был тенденция райондарҙа нык күҙгә ташланып тора. Хатта ВЛКСМ район комитетының беренсе секретарҙары ла айҙар, йылдар буйына торлаҡ ала алмай яфа сигә. Объектив сәбәптәр менән булһа, ни ғәжәп! Юҡ бит, бюрократик уйындар һөҙөмтәһендә генә. Әйтәйек, Кушнаренко район комитетының беренсе секретары Рәфис Сәйетов шул уҡ райком бинаһының подвалында йәшәй. Бүлмәнең бер яҡ стенаһы фанера менән генә бүленгән, уныһы етмәгәс, бер мөйөшө асыҡ ҡалған. Рәфистең ҡатыны Дилә лә — комсомол район комитеты хеҙмәткәре. Әле ул әсә булырға әҙерләнеп, өйҙә ултыра. Күҙ алдына килтереп ҡарағыҙ: көнө буйы һинең баш өҫтөндә иҙән шығырҙап, дап-доп йөрөгән аяҡ тауыштары яңғырап торһон, ти. Күп тә үтмәҫ, баш зиңкеп ауырта башлаясаҡ. Тәүге балаға ауырлы сағында йөрөп эшләгән. Әлбиттә, эҙһеҙ ҡалмаған был хәл: сабыйы оҙаҡ йәшәмәй, вафат булған.

Партия район комитеты Сәйетовтарға фатир вәғәҙә итә, ләкин Дилә уға инә алырҙарына ышанмай. Сөнки уларҙы бер тапҡыр тишек шоманға ултыртҡандар инде. Ә хәҙер райком квартираһында әле йәшәгән прокурор ғаиләһе үҙенең өйсөнә ремонтты нисәмә ай ослай алмай. Ирекһеҙҙән миндә лә: «Ремонтмы икән төп сәбәп аппарат уйыны түгелме икән», тигән уй тыуҙы. Бәлки, партияның район комитеты был юлы ла Сәйетовтарҙы түгел, ә башҡа бер кешене урынлаштырырға тип һыҙалыр?

Кушнаренкола ғына булһа икән ул хәл! Юҡ шул. Борай районында комсомол район комитетының беренсе секретары Гемир Нуретдинов та ҡунаҡханала йәшәй. Торлаҡ мәсьәләһен хәл итеү перспективаһы әле һаман да күренмәй. Шаран районында Альберт Тимеркәев район үҙәгенән 15—20 саҡырым алыҫлыҡта ятҡан Йомаҙыбаш ауылынан йөрөп эшләй. Рейс автобусы киске 6-ла китә. 9-ҙан 6-ға тиклем генә эшләгән беренсе секретарь бармы икән берәй ерҙә? Тәбиғи, Альберт күп осраҡта юлға сығып, «автотранспорт үҫеше өсөн» ҡул күтәреп тауыш бирергә мәжбүр була. Ниндәй перспектива көтә һуң Тимеркәевтар ғаиләһен? Хәҙергә был мәсьәләнең осо күренмәй.

Стәрлетамаҡ ҡалаһында бөтәһенән дә уҙҙырғандар, комсомол ҡала комитетында эшләгән хеҙмәткәрҙәрҙе партияның ҡала комитеты ес йыл элек, ғөмүмән, торлаҡҡа сираттан алып ташлаған. Алты кешенән торған ВЛКСМ ҡала комитеты, үҙҙәренең профсоюз комитетын ойоштороп, ҡала Советы башҡарма комитетына сиратҡа баҫырға мәжбүр булған. Комсомол ҡала комитетына һуңғы тапҡыр 1986 йылда фатир бирелгән. Беренсе секретарь Марат Мәһәҙиев 1987 йылда һайланған. Квартираны ул яңы ғына элек эшләгән «Каустик» берекмәһенән алған. Ә һайланма вазифала эшләмәһә, берекмәлә сираттан да тороп ҡалыр, бында ла баҫа алмаҫ ине. Бүлектәрҙә эшләүселәр нәҡ шундай шарттарҙа ҡалған да инде. Стәрлетамаҡтың комсомол ҡала комитетында кадрҙар йыш алмашына башлаһа, ғәжәпләнергә кәрәкмәҫ. Үҙгәртеп ҡороуға һылтанып, йәштәрҙең мәнфәғәттәрен инҡар итеүҙең бер миҫалы ул.

Г. РИЗУАНОВА.

Талмаҫ ҡанат ҡуйыусы

Ирина Герасимова Шишмәләге 1-се урта мәктәптә башланғыс кластарҙы уҡыта. Был коллективта бишенсе йыл эшләй ул. Магнитогорск педагогия институтын тамамлағас, Силәбелә уҡытҡан ярайһы уҡ ҙур тәжрибә туплаған.

Мәктәпкә һөйөү тойғоһо, уҡыуға, белем алыуға ынтылыш тәрбиәләү, башланғыс кластарҙа башлана ла инде. Кескәйҙәрҙе уҡытҡан педагогтан түҙемлелек, балаларҙың һәр береһен үҙ итеп, иғтибар менән ҡарау, ихласлыҡ талап ителә. Ирина Герасимова — ошо һыҙаттарға эйә булған ысын тәрбиәсе, мәктәптә оло ихтирам яулаған уҡытыусыларҙың береһе. Һәр балаға асҡыс таба белә, шатлығын да, хәсрәтен дә аңлап тора. Берәүҙәрен бәләкәй генә уңышы өсөн дә маҡтап, талмаҫ ҡанат ҡуя, дәрес тураһында онотоп, уйҙары менән алыҫҡа китеп юғалғандарын иплегенә иҫкәртеп, күктән ергә төшөрә. Балаларҙа ҡыҙыҡһыныу уятыу, уларҙың хәтерендә ҡалһын өсөн дәрестәрҙе уйын формаһында үткәреүҙе өҫтөн күрә.

Беренсе класҡа уҡыусылар балалар баҡсаһынан ғына килмәй, өйҙә тәрбиәләнгәндәре лә бар. Тәбиғи, әҙерлек кимәле бер түгел.

— Балалар баҡсаһынан килгәндәр дәрестә яҡшыраҡ үҙләштерә, тиҙәр. Мин быны менән һис кенә лә килешмәйем. Киреһенсә, уларҙы иғтибарһыҙыраҡ тип иҫәпләйем. Дәрестә тиҙ оталар, әлбиттә, тик һә тигәнсе онотоп та ҡуялар. Тиктормаҫ уҡыусы, ҡағиҙә булараҡ, балалар баҡсаһынан килә. Ә өйҙә өләсәйҙәре менән ултырғандары иғтибарлыраҡ та, тәртиплерәк тә, тырыш та була,— тип һөйләй Ирина.

Төрлө әҙерлектәге балаларға дәрес биреү өсөн уҡытыусыға ла ныҡлап әҙерләнергә кәрәк, әлбиттә. Ирина ике план менән эшләй икән. Сөнки йомшағыраҡ уҡытыусылар, зирәктәренә эйәрә алмайынса, уҡыуҙан һыуыныуы ихтимал, ә көслөрәктәрен уртаса кимәлдәге программа менән уҡытыу балаларҙа яҡшыраҡ өлгәшеү теләген һүндерергә мөмкин.

— Шуныһы яҡшы: хәҙер класта уҡыусылар 30-ҙан артырға тейеш түгел. Дәрестә үҙләштереүе еңелерәк. Балаларҙы уҡытыу менән эш бөтмәй бит, уларҙың теманы аңлап һөйләй белеүе лә кәрәк. Шул саҡта ғына уҡытыусы хеҙмәте бушҡа китмәй,— ти Ирина.

Г. ҺӘУБӘНОВА.
Ю. КӘРИМОВ фотоһы.
Шишмә.

• Реплика

Нисек аңларға?

Әле ҡасан ғына төҙөлөш майҙаны булып гөрләп торған Сипайлово үҙенә башҡа ҡалаға йылдам әйләнә бара. Микрорайондағы йорттарға һоҡланып ҡарайым, сөнки 1986 йылдың яҙында миңә лә төҙөлөштә ҡатнашырға тура килде. Йорттар тиҙерәк сафҡа индерелһен өсөн штукатур-малярҙарға ярҙамға тиҫтәләгән ойошманан күп кенә кешеләр ебәрелде. Мин М. Рыльский урамындағы йорттар төҙөлөшөндә эшләнем. Беҙ йорт эсендә биҙәү менән шөғөлләнгән арала өй ҡаршыһындағы майҙан сүп-сарҙан, төҙөлөш бысрағынан таҙартылды. Сварщиктар тиҙ генә спорт майҙансығы эшләп ҡуйҙы. Балалар өсөн экзотик матур уйынсыҡ өйҙәр, эскәмйәләр, турниктар, бәүелсәктәр ҡуйылды, ҡара тупраҡ килтерелде. Ағастар ултырттылар, газондар яһап, сәскә орлоҡтары сәстеләр, юлға һәм һуҡмаҡтарға асфальт түшәнеләр. Торлаҡ йорттар комплексы сафҡа индерелде. Ҡыш көнө каток яһанылар, биҙәп шыршы ултырттылар. Күрһәм, күңелемде ғорурлыҡ солғап ала: был йорттарҙа минең дә өлөшөм бар бит!

...Өс йыл үтте. 1989 йылдың яҙында үләндәр сыҡҡас, ағастар япраҡ яра башлағас, йорт тирәһен таҡта ҡоймалар менән уратып алдылар. Турниктарҙы, бәүелсәктәрҙе, эскәмйәләрҙе автоген менән киҫеп ташланылар ҙа тәрән соҡорҙар ҡаҙырға керештеләр. Фигуралы аҡ кирбес ташып, ниндәйҙер бина һала башланылар. Тик бер аҙна ла үтмәне, төҙөлөш туҡтатылды. Йәй буйы төҙөүселәр килеп баҫманы. Материалды һаҡлауҙы ойоштороу ҙа юҡ. Балалар сыҡмай унан, кирбес ваталар, төҙөлөш сүпсарында соҡоналар. Йәй ҙә үтте, көҙ ҙә. Төҙөлөштә эшкә тотонған кеше юҡ. Тау-тау булып, ватылып бөткән кирбес, тимер-бетон конструкциялар таралып ята. Быны нисек аңларға? Был эшкә кем дә булһа яуаплылыр бит? Ҡала, район Советтарында архитекторҙар бүлектәре бар. Улар ҡайҙа ҡарай икән? Ҡортҡосолоҡ тип атар инем мин быны.

С. ХӘЛИЛОВ.
Өфө.

Кеше булырға ярҙам итәйек

Беҙҙең училищеға яңы ғына ҡабул ителгән ҡыҙҙар әхләҡи саф, таҙа атмосферала ғәҙеллеккә, талапсанлыҡҡа, изге күңеллелеккә нигеҙләнгән коллективта йәшәй башлай.

Изге күңеллелек! Ниндәй йылы, йомшаҡ, өмөт уятыусы һүҙҙәр. Ошо 13—16 йәштәге ҡыҙҙарҙың бит бер кемгә лә яҡшылыҡ эшләгәндәре юҡ — тик яуызлыҡ ҡына. Уларҙы уҫаллыҡтан арындырыу, тупаҫланған күңелдәрен йомшартыу, кешеләргә ҡарата ярҙамсыллыҡ тойғоһон уятыу, кеше хеҙмәтенә, кеше ҡайғыһына ихтирам һәм иғтибар тәрбиәләү — ниндәй ҙур бәхет!

Һуңғы йылдарҙа йәш быуында аңлы граждандыҡ ҡарашын тәрбиәләү мәсьәләһе киҫкенләште, сөнки 11—16 йәштәге үҫмерҙәрҙең һиҙелерлек өлөшө ғаилә, мәктәп, йәмғәтселектән ситләште, йәмғиәттең артабанғы сәләмәт үҫешенә ҡурҡыныс янай башланы. Үҫмерҙәрҙең ошо агрессив, әхләҡһеҙ өлөшө тиҫтерҙәренә кире йоғонто яһай. Быны булдырмаҫ өсөн махсус һөнәрселек-техник училищелары асылды. Беҙҙең Ишембай ҡалаһындағы 1-се СПТУ 1975 йылда эшләй башланы.

Ҡыҙҙар бында Россия Федерацияһынан һәм Грузия ССР-ынан килә. Улар сиктән тыш тәрбиәһеҙ, әхләҡһеҙ, наркотиктар ҡулланыуҙан рухи ауырыуға әйләнгәндәр, беҙҙең сәйәси тормошҡа ҡарата боҙоҡ уйҙалар. Бына К. Софьяның «эс серҙәре»: «Бөтәгеҙ ҙә: «Нацизм, фашизм — ҡот осҡос күренеш!» тиһегеҙ. Әммә ул гүзәл дә! Сөнки ул булмаһа, йәшәргә хаҡы булмаған күптәр әле лә тере булыр ине...»

«Һеҙ, фашизмды яманлайһығыҙ, ләкин ниңә төрлө быуындар уға тартыла, Гитлерға, фашистик Германияға табына? Свастиканы символ итеп һайлай. Нимә? Бөтәһе лә иҫәрләнгәнме әллә? Әммә аҡылдан бит бермәләп яҙалар...»

«Минең өсөн донъяла тоғро дустарым һәм инаныуым ғына бар. Әсәйем дә юҡ һәм булыуын да теләмәйем. Ул да һеҙҙең һымаҡ...»

Шаҡ ҡатырлыҡ! Совет мәктәбендә уҡыусы 15 йәшлек ҡыҙ фашизмға ҡаршы көрәшеүсе һәм Ленинград блокадаһын еңеүселәрҙең ейәнсәре ошо тиклем әҙәпһеҙлекте, Советҡа ҡаршы асыуҙы ҡайҙан туплаған? Ғәжәпкә ҡаршы, әсәһе лә тырыш һәм баҫалҡы эш кешеһе бит. Беренсе сиратта, мәктәптәге педагогтар коллективының уҡыусылар яҙмышына ҡарата һалҡын, бюрократик мөнәсәбәтенең һөҙөмтәһе был. Софьяның шәхси эшендәге мәктәп характеристикаһы исем өсөн генә яҙылған. Хатта ни өсөн уны махсус ПТУ-ға ебәреүҙәренә ғәжәпләнеп тә ҡуяһың. Әммә!

Мәктәп уның боҙоҡтар араһындағы ҡот осҡос мажаралары, наркомандар менән эшкәлешеүе хаҡында бер ни ҙә белмәгән. Яңы «дуҫтары» иһә Советтарға ҡаршы көрәш алып барыусы фашистик идеологияға табынған. Софья бына ошо ышаныслыҙ юлдан упҡынға юл алған.

Уның менән әңгәмәләшеү ваҡытында шул асыҡланды: Софья өсөн Гитлер һәм фашизм кәпәренеүҙең, үҫмерҙәр максимализмының сағылышы ғына. Улар ярҙамында үҙенең оятһыҙ ҡылыҡтарын йәшереп ҡалдырырға теләгән...

Ҡыҙҙарҙы ябыҡ уҡыу йортона килтергән сәбәптәр ниндәйҙәр һуң? Үҫмерҙе шәхес итеп тәрбиәләүҙә ата-әсәнең ыңғай йоғонтоһо етешмәй. Ғаиләләге көнкүреш культураһының түбән булыуы ла мөһим урын тоталыр, моғайын. Һөҙөмтәлә малайҙарҙы һәм ҡыҙҙарҙы урам йоғонтоһонан рухи, әхләҡи йәһәттән яҡлау эше ифрат йомшаҡ ҡуйылған.

...Бер тапҡыр миңә «үҫмерҙәр психологияһы белгестәренең», йәғни шәхесте тулыһынса азат итеү өсөн көрәшеүселәрҙең фекерҙәрен ишетергә тура килде. Улар үҫмерҙәрҙе йәмәғәт һәм көнкүреш тәртиптәрен боҙған өсөн дә суд ҡарарынан тыш ябыҡ уҡыу йортона оҙатыу менән килешә алманы. Бында улар хоҡуҡи яҡланғанлыҡтың булмауын күҙҙә тота. Эйе, хоҡуҡи яҡлау мотлаҡ кәрәк! Башҡаса булыуы мөмкин дә түгел. Әммә шуны ла оноторға ярамай: махсус мәктәптәрҙе һәм ПТУ-ларҙы колонияларға тиңләмәйек, улар бит хоҡуҡ һаҡлау органдарына түгел, ә халыҡ мәғарифына — педагогтар коллективтарына бойһона. Әгәр был йорттарҙағы йәшәү рәүеше кешелеклелек, изгелекле [illegible] шланғыстарға нигеҙләнһә, ыңғай һөҙөмтәләр генә бирәсәк.

Ф. ХӘБИРОВ,
1-се СПТУ директоры.
Ишембай.

ФАЙҘАЛЫ КУЛЬТУРА

КУКУРУЗ БАҪЫУҘАРЫ инде утыҙ йылдан ашыу республиканың ҡырҙарын матурлап, йәшел стена булып үҫә. Хрущев заманында үтеп кергән был культура йәшел масса, силос, мал аҙығы сығанағына әйләнде.

Игә башлауҙың тәүге осоронда ҙур уңыштарға ирешелә ине. 60-сы йылдар уртаһында хатта урман кеүек йыш һәм бейек булып үҫеп, сәкәндәре өлгәрә башланы. Мәктәп балалары уларҙы йыйып өйә, машина-тракторҙар фермаларға ташый торғайны. Ә йәшел масса һарғая башлаһа, баҫыуға көтөү индереп ебәрә торған булдылар.

Тора-бара культураны мал аҙығы өсөн генә үҫтереү отошло тип табылды һәм йәшел сағында уҡ силосҡа ура башланылар. Йылдан-йыл кукуруз үҫеше тотҡарлана килде.

Фәнни игеү, агротехника алымдарын ҡулланыуҙы бөтөнләй кәметтеләр: кем нисек булдыра, шулай эшкәртә. Силосҡа бара ул тип, сүп үләненән аралауға, ашламалар менән туҡландырыуға иғтибар ҙа бирелмәне. Шулай итеп, культура тотороҡло уңыш бирмәй башланы.

Кукуруз—гектарынан иң ҙур йәшел масса бирә торған культура. Тупраҡ бик тиҙ ярлылана, сөнки туҡлыҡлы матдәләрҙе үҙенә күп ала ул. Үҫкән ваҡытында бер нисә тапҡыр минераль ашламалар индермәһәң, уңыш ҙур булмай. Квадрат-оя һәм башҡа ысулдар менән сәсеү онотолдо. Ябай ғына, йыш итеп сәсә башланыҡ. Йыш сәскәс, техника менән эшкәртеү ауырлаша.

Силос массаһын әҙерләүҙе, тапатыуҙы, ябыуҙы һәм башҡа технологик процестарҙы ла артығынан тыш ябайлаштырып ебәрҙек. Ә бит силос эшләү йәшел көйөнсә оҙаҡ һаҡланырлыҡ итеп ҡаплап ҡуйыу — ҡатмарлы технология ул. Был өлкәлә тәжрибә тупланманы. Аҙаҡ килеп, бөтә ерҙәрҙә лә кукуруз үҫтереүҙе «волюнтаризм» тип таптылар.

Әгәр колхоз-совхоздар уны сеголдор йәки башҡа техник культуралар кеүек дәүләткә һатһа, бәлки, сәсеү материалының сифаты, агротехник эшкәртеү үҙенсәлектәре продукцияны, йәғни силосты әҙерләү ысулдары төрлө комиссияларҙың күҙ алдында торор ине.

Уйлап ҡараһаң, кукурузды алмаштырырлыҡ мал аҙығы юҡ тиерлек. Уны мал сеголдоро, суданка үләне, көнбағыш һәм башҡа культуралар менән тулыландырып ебәрергә була.

Миңә, тупраҡ белгесе — агрохимик булараҡ, республиканың барлыҡ райондарында баҫыуҙарҙа йөрөргә тура килде. Кукуруз бөтә ерҙә лә үҫә, уңыш йылына ҡарата төрлө урында төрлөсә була. Һуғарыу ҡулланып ҙур ғына уңыш алыусылар бар. Беҙгә кукурузды мал аҙығы булараҡ ҡулланыу отошлораҡ. Республика климаты шарттарында сәскәс, шытып сығып, үҫеп китеп, ҙур биомасса бирә икән, шул етә. Минеңсә, кукурузды орлоҡ алырға үҫтереүҙең һис кенә лә кәрәге юҡ. Сөнки ул беҙҙә орлоҡ бирерлек үҫеп етмәй, һабағы, япраҡтары һарғая һәм мал аҙығына кәрәкле сифаты ла юҡҡа сыға.

КУКУРУЗДЫ тыуған яғында—Үҙәк Америкала нисек игәләр? Борон заманда уҡ уны индеецтар үҫтергән. Хәҙер ҙә Америкала киң таралған үҫемлектәрҙең береһе. Нимә генә етештермәйҙәр унан! Он итеп тарттыралар, көрпә, крахмал, үҫемлек майы алалар. Бөтә ерҙә лә мал аҙығы булараҡ ҡулланыла. Яғыулыҡ өсөн дә файҙаланалар. Промышленноста сырье ролен үтәй. Ҡағыҙ, линолеум, вискоза, изоляция материалдары, *һеркә (уксус) кислотаһы* һәм башҡа күп нәмәләр эшләнә. Әҙ генә ваҡыт эсендә кукуруз биш континентта ла таралған. Уны тәү тапҡыр Христофор Колумбтың матростары күргән һәм индеецтарҙан үҫтерергә өйрәнгән. Мексикала кукуруз үҫемлегенә алтын һәйкәл бар. АҠШ-тағы Айова штатының эмблемаһы — кукуруз. Беҙҙә кукурузды тәүгеләрҙән булып XVII быуатта молдавандар һәм грузиндар үҫтереп ҡуллана башлаған.

Кукуруз баҫыуҙарының хәҙерге көндә Европала ла ҙур әһәмиәткә эйә була барыуы билдәле. Англия, ГФР, Голландия һәм Скандинавия илдәрендә кукуруз баҫыуҙары киңәйтелде. Уны мал аҙығы өсөн үҫтерәләр, малға ашатырға арыш, бойҙай, арпа ҡулланылмай башланы. Кукуруз культураһы иҫәбенә сәсеүлек майҙанын ҡыҫҡарттылар. Төрлө силос һалыу, консервалар, пасталар эшләү технологияһы булдырылды.

Беҙҙең илдә лә һуңғы йылдарҙа кукурузға әһәмиәт арта. Курган, Силәбе өлкәләрендә тәжрибә майҙандары, ғалимдар етәкселегендә ғилми-техник станциялар барлыҡҡа килтерелде. Һөҙөмтә насар түгел, шуға ла Башҡортостанда кукуруз программаһы ҡабул ителде. Был эш менән Бөтә Союз фәнни мал аҙығы әҙерләү технологияһы институтының Башҡортостан бүлексәһе (филиалы) шөғөлләнә. Институттың ике урында: Бөрөлә һәм Өфө районының Черполес ауылы янында тәжрибә хужалыҡтары бар. Бына шул Өфө районындағы тәжрибә майҙанының 30 гектар ерен кукуруз сорттарын һынау өсөн файҙаланалар. Краснодар крайынан, Украинанан төрлө сортлы орлоҡтар алып ҡайттылар. Сәсеп үҫтергәндән һуң, гибридтарҙың ҡайһыһы һәйбәтерәк икәнен билдәләп, республикала кукуруз үҫтереү буйынса дөйөм технология бирергә иҫәпләйҙәр.

КУКУРУЗ культураһының үҙенсәлеге шунда: уны өлгөрөп еткән килеш тә, өлгөрмәһә лә файҙаланырға мөмкин. Кукуруз үҫтереү буйынса агротехниканы шул уҡ көньяҡ өлкәләрҙәге ғилми-тәжрибә станцияларынан алырға мөмкин. Тәжрибәләрҙе колхоз-совхоздар ерендә йәйелдерергә була. Әгәр беҙҙең хужалыҡтар көньяҡ өлкәләрҙән кукуруз үҫтереүҙә махсуслашҡан хужалыҡтарға барып үҙҙәре һайлап алыу тураһында килешеү төҙөһә, улар кооперация нигеҙендә гибридтарҙың һәйбәтерәктәрен һатыр ине. Республикала һәр хужалыҡта ғалим-агрономдар — есдүртәр кеше. Үҙҙәре үк тәжрибә үткәрә алыр ине. Әлеге һымаҡ яртышар сотый ергә стаканлап түгел, 200—300 гектар майҙанға тонналап сәсерҙәр ине. Уның япраҡтарын нисә көн дә үлсәп торорға? Республикала 960 хужалыҡтың ҡайһыһы һәйбәт уңыш алғаны шунда уҡ билдәле буласаҡ. Гибридтарҙың беҙҙә һәйбәт үҫә торғандарын асыҡлауы еңел булыр ине. Барыбер орлоҡто үҙебеҙ етештерә алмайбыҙ, һатып алырға тура киләсәк.

Үҫкән кукуруз ниндәй булыуына ҡарамаҫтан, консервалау, силос, паста эшләүгә, витаминдар менән өҫтәп баҫтырып ҡуйыуға технология булдырырға кәрәк. Шул ваҡытта мал аҙығына ҡытлыҡ бөтөр. «Кукуруз» программаһы 10—15 йылда түгел, 2—3 йылда үтәлер ине. Булғанды, үҫтергәнде әрәмшәрәм итмәйенсә ҡулланырға кәрәк. Уңышты ҡышҡа арттыра алмайбыҙ икән, мал аҙығы әҙерләү технологияһын күтәрергә кәрәк. Ә кукуруз теләһә ниндәй тупраҡта шытып сыға һәм үҫә ала.

Х. САФИУЛЛИН.

Өфө.



Беҙҙең Рәшиҙә апай...

Йылайыр районының Сәлим ауылында уңған, эшлекле кешеләр күп. Минең шуларҙың береһе — алдынғы быҙау ҡараусы Рәшиҙә Сафиулла ҡыҙы Ярмуллина хаҡында һөйләгем килә.

Уның тураһында бер-ике юл менән генә әйтеп китеүе ҡыйын, шуға ла мин Рәшиҙә апайҙың яҡшы һыҙаттарын һанап ҡына сығырға булдым.

Ул «Башҡорт» совхозының Сәлим фермаһында быҙау ҡараусы булып 20 йылға яҡын эшләй. Бөтә ғүмерен бағышлаған был хеҙмәте өсөн Рәшиҙә апайҙың исеме һәм фотоһүрәте районның «Коммунизм өсөн» газетаһы биттәрендә даими баҫылып тора. Ул шулай уҡ быҙауҙарҙан артым алыуҙа ҙур уңыштарға өлгәшеп Почет грамоталары, премиялар менән йыш бүләкләнә.

Яҡшы эшсе күп осраҡта яҡшы кеше лә була. Рәшиҙә апай ҙа ире Шакирйән Хәмитйән улы Ярмуллин менән биш бала тәрбиәләп үҫтерҙе. Балалары тыйнаҡ, тәртипле, эшсән, ғөмүмән, ата-әсәләренә тап килеп үҫеп еттеләр инде. Өлкән улдары Рәхимйән Йылайыр «Агрохимия» берекмәһенең Яманһаҙ ауылы филиалында тракторсы булып эшләй. Ә икенсе улдары Сәлмән район газетаһы редакцияһында эшләй. һәм хәҙер юғары уҡыу йортона барырға йыйынып йөрөй. Өсөнсө улдары Хәсән быйыл урта мәктәпте тамамлай. Ул да ағалары кеүек йыл һайын йәйге каникул осорон совхозға ярҙам итеп үткәрә. Кесе улдары Азат менән иң бәләкәйҙәре Рәзилә әле мәктәптә тырышып уҡып йөрөйҙәр.

Шуны ла әйтеп үтергә кәрәк, Рәшиҙә апай менән Шакирйән ағайҙың бергә донъя көтә башлауына тиҙҙән 25 йыл тула. Мин уларҙы ауылдаштары исеменән көмөш туйҙары менән ҡотлайым. Һүҙемде ослап, Рәшиҙә апай һымаҡ кешеләр үҙҙәренең эше һәм тормошо менән йәштәргә өлгө булып тороуын теләйем.

Т. ТУЙҒОЛОВ.

СӘЙЕТБАБА УҢҒАНДАРЫ

«Йондоҙ» колхозының Сәйетбаба һөтсөлөк фермаһында Фәрит Мәүлетбирҙин ҡатыны Гөлмирә менән эшләй — үҙе 15 йыл инде мал ҡарай, ә тормош юлдашы — һауынсы. Гөлмирәнең һыйырҙары мул һөтлө, ошо ҡышҡы осорҙа һәр береһенән көнөнә 8-әр килограмм һөт һауған.

Быҙау ҡараусы Әхиәр Фәттәхов коллективта армияға тиклем эшләп киткән. Хеҙмәтен тултырып ҡайтҡас та ошонда килгән. Бында тырыш комсомолецты ҙур теләк менән ҡабул иткәндәр. Әхиәр Афзал Мәүлетҡолов менән эшләй. Улар 56 баш мал ҡарай. Яҡшы тәрбиәләгәс, хайуанҡайҙар көр була — малсылар көнөнә 850—900 грамм артым ала.

ҺҮРӘТТӘРҘӘ: Гөлмирә һәм Фәрит Мәүлетбирҙиндар; мал ҡараусылар Әхиәр Фәттәхов (һулда) һәм Афзал Мәүлетҡолов.

Ю. КӘРИМОВ фотолары.

Ғафури районы.

ТАРИХҠА БАЙҠАУ

Хәтеремдә, мәктәптә уҡыған йылдарҙа беҙҙе, Бөйөк Октябрь социалистик революцияһына тиклем халҡыбыҙ наҙан, томана булған, уның үҙ яҙмаһы ла, әҙәбиәте лә булмаған, фәҡәт ауыҙ-тел ижады өлкәһендә генә уңышҡа өлгәшә алған, тип өйрәтә торғайнылар. Белмәйем, нилектән шулай эшләнгәндер? Революцияның илебеҙ тормошондағы әһәмиәтен һәм ролен ҙурайтыбыраҡ, ҡабартыбыраҡ күрһәтергә теләүҙәнме, әллә тарихты, рухи мираҫты тейешенсә белмәүҙәнме? Моғайын, төп сәбәп — һуңғыһылыр. Сөнки республикабыҙҙа археографик эштәр яйға һалынып, боронғо яҙма сығанаҡтар фәнни әйләнешкә индерелгәс тә үк бындай догматик раҫлауҙарҙың ерлеге юҡҡа сыҡты. Ғилми тикшеренеүҙәр хатта әҙәби телдең дә совет осорона ғына хас булған күренеш түгеллеген иҫбатланы.

Был өлкәләрҙәге эҙләнеүҙәр әлеге көндә лә дауам итә, һөҙөмтә булараҡ, яңынан-яңы монографиялар, коллектив хеҙмәттәр донъя күрә тора. Оҙаҡламай күп томлы «Башҡорт әҙәбиәте тарихы»ның тәүге өс томын ҡулыбыҙға аласаҡбыҙ. Былтыр Мәскәүҙәге «Наука» нәшриәтендә «Башҡорт әҙәби теле тарихы буйынса очерктар» китабы баҫылып сыҡты. Был мәҡәләмдә мин ошо китап хаҡындағы ҡайһы бер фекерҙәрем менән уртаҡлашмаҡсымын.

Очерктар СССР Фәндәр академияһы Урал бүлеге Башҡортостан ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ғалимдары тарафынан яҙылған. Ул инеш һүҙ менән асыла. Бында «әҙәби тел» төшөнсәһенә аңлатма бирелә, әҙәби телдең фольклор теленә һәм ябай телмәргә мөнәсәбәте яҡтыртыла, шулай уҡ әҙәби тел үҫешен осорҙарға бүлеү принциптары билдәләнә. Һуңғы мәсьәләлә авторҙар яңы концепция тәҡдим итә. Уларҙың фекеренсә, башҡорт әҙәби теле үҙенең үҫешендә ике ҙур этап үткән: милләт формалашҡанға тиклемге һәм унан һуңғы этаптар. Һәр этап үҙ сиратында бер нисә осорға бүленә.

Инеш бик йыйнаҡ һәм асыҡ итеп яҙылған. Авторҙар очерктарҙың яҙылыу сәбәбен, маҡсатын һәм күтәргән проблемаларын аныҡ билдәләй. Әлбиттә, әгәр улар әҙәби телебеҙ тарихын өйрәнеү өлкәһендә егерменсе-утыҙынсы йылдарҙа башҡарылған ҡайһы бер эштәрҙе лә атап, баһалап үткән булһа, инеш тағы ла тулыраҡ, йөкмәткелерәк килеп сығыр ине. Миҫал итеп Ғәбделәхәт Билданов эшмәкәрлеген генә лә алырға мөмкин. Мәғлүм булыуынса, 1931 йылда «Аймаҡ» журналы биттәрендә донъя күргән «Башҡорт әҙәбиәте тарихы тураһында нескенә бер байҡау» тигән мәҡәләһендә ул революцияға тиклемге әҙәби тел мәсьәләләренә лә ҡағылып үтә һәм ҡыҙыҡлы һығымталар яһай.

Китаптың төп өлөшө ҙур өс бүлектән (очерктан) тора. Тәүге бүлек—әҙәби телдең иң боронғо дөйөм төрки яҙма ҡомартҡылар дәүеренән алып XVIII быуат аҙағына тиклемге, икенсе бүлек — XIX быуат һәм XX быуат башы, өсөнсө бүлек совет осоро тарихына арналған.

Тәүге бүлектә яҙыу иң ауыры һәм мәшәҡәтлеһе булғандыр, моғайын. Сөнки ул шаҡтай ҙур ваҡыт арауығын үҙ эсенә ала һәм сығанаҡтарға үтә ярлы. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, тотош алғанда, бүлек уңышлы килеп сыҡҡан. Уның авторы филология фәндәре кандидаты Р. Х. Халиҡова әҙәби тел үҫешен халыҡ тарихы менән тығыҙ бәйләнештә тикшерә. Төрки телдәр системаһын диахроник һәм синхроник юҫыҡта яҡшы белеүе уға боронғо ҡомартҡылар араһынан туған телебеҙгә мөнәсәбәтлеләрен айырып алырға һәм төп иғтибарҙы шуларға тупларға мөмкинлек биргән.

Икенсе бүлек тә ярайһы уҡ ҡатмарлы осорҙо иңләй. Халыҡтың һөйләү теленән ныҡ алыҫлашҡан суфыйсылыҡ әҙәбиәтенең телен өйрәнеү — үҙе ҙур мәсьәлә. Унан һуң үҙенсәлекле дәүер булып мәғрифәтселек әҙәбиәте килә. XX быуат башындағы әҙәби телебеҙ ҙә ябай, бер яҡлы күренеш түгел. Уның үҫеше иҫкелек менән яңылыҡтың, традицион «юғары» стиль менән халыҡсан стилдең үҙ-ара көрәше, ҡатмарлы үрелеше шарттарында бара. Бүлек авторы филология фәндәре кандидаты И. Ғ. Ғәләүетдинов быларҙы ярайһы уҡ тейешле кимәлдә яҡтыртҡан.

Белеүебеҙсә, башҡорт әҙәби теле үҫешенең революциянан һуңғы осоро сағыштырмаса күберәк, ентеклерәк өйрәнелгән. Уның буйынса байтаҡ мәҡәлә, китап яҙылған. Әммә авторҙар (филология фәндәре докторҙары Э. Ф. Ишбирҙин һәм З. Ғ. Ураҡсин) барыбер тапалған юлдан китмәгән. Улар, мәҫәлән, халҡыбыҙҙың йәнле һөйләү теле боронғо замандарҙа яҙма төрки теленә бик яҡын булған, хосусиәтле башҡорт өндәре сама менән XVI—XVII быуаттарҙа барлыҡҡа килгән, тигән яңы фекер әйтәләр, хәҙерге әҙәби телдең формалашыу тарихы, бөгөнгө торошо һәм үҫеш перспективаһына бәйле өҫтәлмә мәғлүмәттәр килтерәләр, ҡыҙыҡлы күҙәтеүҙәр, тәҡдимдәр яһайҙар.

«Башҡорт әҙәби теле тарихы буйынса очерктар» китабының фәнни әһәмиәте бик ҙур. Мәскәүҙә рус телендә баҫылып сығып, бөтә илгә таратылыу факты үҙе үк уға ыңғай баһа булып тора.

М. НӘҘЕРҒОЛОВ,
филология фәндәре кандидаты.

Мөнир Мәмбәткулович Мырҙағәрәев Шишмә районының Дурас урта мәктәбендә башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән уҡыта.

ҺҮРӘТТӘ: V класта туған тел дәресе бара.

А. БИЛАЛОВ фотоһы.

ТЕЛЕ БАРҘЫ ИЛЕ БАР

Мәүлит ЯМАЛЕТДИНОВ

ХАЛҠЫМ ХАЗИНАҺЫ

Туған телде,
кӱҙ ҡараһы кеүек,
Һаҡлайыҡсы, ҡыҙҙар,
егеттәр.
Ҡарғалар күп, ә беҙ
һирәкбеҙ, тип
Ҡарҡылдауға күсмәй
бөркөттәр.

Ерҙә һәр тел —
ғүмер буйы йыйған
Хазинаһы бит ул
халыҡтың.
Хаҡыбыҙ юҡ беҙҙең
юғалтырға
Бөртөгөн дә ошо
байлыҡтың.

Бәғзеләрҙең бөгөн шул
мираҫты
Тәләф итеүҙәре хуп,
түгел.
Ғазап сигеп үҙең
тапмағанды
Туҙҙырыуы, эйе,
бик еңел.

Туған телде,
кӱҙ ҡараһы кеүек,
Һаҡлайыҡсы, ҡыҙҙар,
егеттәр!
Ҡарғалар күп, ә беҙ
һирәкбеҙ, тип
Ҡарҡылдауға күсмәй
бөркөттәр.

Алтын тапҡандай шатланды...

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте ун көнлөгөнөң йомғаҡлау кисәһен Тимер урта мәктәбендә бөтә уҡыусылар ҙа көтөп алды. Шулай булмай ни, бөгөн бит ун көн буйы түккән көскә, хеҙмәткә йомғаҡ яһала. Ун көн эсендә һәр класс төрлө темаларға альбомдар сығарырға, үтелгән әҫәрҙәргә иллюстрациялар яһарға, шиғыр бәйгеһе үткәрергә, башҡорт теле тураһында, халыҡ йырҙары, таҡмаҡтар, милли уйындар өйрәнергә өлгөрҙө. Әлбиттә, әҙерлек бер нисә ай алдан башланғайны. Шуға күрә ун көнлөк барышында драма түңәрәгендә ҡатнашыусыларҙың (етәксеһе — башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Ш. З. Бикмөхәмәтов) Шәриф Бикҡолдоң «Өмәлә» исемле пьесаһын сәхнәләштереүе лә, «Урал» башҡорт үҙәгенең Бөрйәндә асылған филиалы — «Бөрйән» ойошмаһынан килгән Иҫәнғолин иптәштең уҡыусылар менән осрашыуы ла ҡыҙыҡлы булды.

...Милли кейемдәге ике ҡыҙ сығып, йомғаҡлау кисәһен шиғыр юлдары менән асты: Гөлсөм Яубасарова Рәми Ғариповтың «Туған тел»ен һөйләһә, Роза Баязитова Зәйнәб Биишеваның «Башҡорт теле»н яттан ишеттерҙе.

Унан һуң шиғыр бәйгеһе башланды: бында һәр кластың еңеүселәре генә ҡатнашты. Жюри ағзаларының билдәләүенсә, 10 класс уҡыусыһы Әхмәтшина Клара менән Бикмөхәмәтова Айһылыу еңеүсе булды.

Иң ҡыҙығы шулай ҙа ике командаһың КВН-ы булғандыр. Унда 1-се команда (капитаны — Зөлфиә Ямантолова) еңеүсе булды. Ләкин берәү ҙә үҙен еңелеүсе итеп тойманы.

Шуны ла әйтеп китергә кәрәк, ун көнлөк барышында өлкән класс уҡыусылары араһында башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса олимпиаданың I туры үткәрелгән. Районда үтәсәк II турҙа ҡатнашыу хоҡуғын Гөлсәсәк Баязитова (11 класс) һәм Клара Әхмәтшина (10 класс) яулаған.

Һүҙемде мин 7- класс уҡыусыһы Айгөл Ғазинаның «Аҙналыҡ» исемле шиғыры менән тамамламаҡсымын:

Башҡорт теле аҙналығы
Башланып китте беҙҙең.
Викторина һорауына
Яуап яҙабыҙ бөгөн.
Бер уҡыусы шиғыр яҙа,
Икенсеһе — әкиәт.
Өсөнсөһө нишә яҙа
Гөж килебеҙ — әкәмәт!
Береһе һүрәт төшөрә
Ҡамыр батыр хаҡында.
Икенсеһе йыр өйрәнә
Туған теле хаҡында...
Аҙналыҡ та үтеп киткән
Йомғаҡлау ҙа еткән бит!
Матур шиғыр ҙа һөйләнде,
Ҡобайыр ҙа ҡойләнде.
Конкурс һүрәттәренә
Урындар билдәләнде.
Ҡобайыр ҡойләүсеһе лә
Бүләк алып ҡыуанды.
Бик күңелле тамамланды
Был йомғаҡлау кисәһе.
Алтын тапҡандай
шатланды
Берәү түгел — бөтәһе.

З. ЯУБАҪАРОВА.
Бөрйән районы.

Әсәм тел
Уҙан ғи
Йөрәгендә
Кеше бул

Шартт

Бөгөнгө көндә
лек мәсьәләһе кү
сой. XIX партко
һәм КПСС Үҙәк
ның сентябрь (
Пленумы ҡарар
мошҡа ашырыу м
Салауат ҡалаһын
ҙат» милли-мәҙә
мәһе башҡорт те
буйынса курстар

Әлеге ваҡытта
ҙәүселәрҙең мәҙ
йында һәм музык
һында эш алып б

Әле Машина
һарайына башҡор
рестәрен өйрәнер
кеше йөрөй. Кур
ике мәртәбә — ш
сағна көндәре
үткәрелә. Башҡ
өйрәнеүселәр ара
ло һөнәр кешелә
тыусы, эшсе, ин
төп уҡыусылары
һы ла боронғо т
ҡыҙыҡһынып өйр

Ләкин был ө
лемалар ҙа етер
тәрҙе 4-се урта
башланғыс класт
сыһы Разифа
алып бара. Ниңә
гән дәрестәре ссе
сы ҡала халыҡ
бүлеге аҡса түлә
буҙат» берекмәһе
туҡтатмау маҡсат
иҫәбенән аҡса тү
бүр булды.

Күп уҡыусылар
ҡортса, башҡортса
лек таба алмауҙа
лаланар. Бигерәк
үткәреү буйынса
ҡулланмалар юҡ.
ваҡытта «Ленинец
ская Башкирия»
рында «Башҡорт т
тәре» баҫылып сы
ны. «Ана шундағы

Юғарынан күрһәтмә юҡ...

Балаҡатай районының Урғалы поселогында, Юлдаш ауылында беренсе кластан уҡ русса уҡыталар. Сөнки балалар баҡсаһында тәрбиә эштәре әсә телендә алып барылмай.

Урғалы линия производство идаралығына ҡараған был балалар баҡсаһында 130 бала тәрбиәләнә. Шуларҙың 80 проценты самаһы башҡорттар. Мин балалар баҡсаһы мөдире Р. Хәсәновананан:

— Балаларҙы ниндәй телдә һөйләштерәһегеҙ? — тип һораным. Ул берҙә аптырап тормайынса:

— Рус телендә, тип яуапланы. Һәм һүҙен дауам итеп:

— Башҡорт телендә һөйләштерергә юғарынан күрһәтмә юҡ,— тине.

Хайран ҡалырлыҡ эш бит был. Башҡорт балаларын үҙ әсә телендә һөйләшергә өйрәтер өсөн дә үрҙән күрһәтмә кәрәк икән! Ошо тураһа БАССР Халыҡ мәғарифы министерствоһы ни әйтер?

Я. ШӘМСЕТДИНОВ.
Өфө.

«ӘЛИФБА»НЫ БИГЕРӘК ҺАҒ

Үҙ тыуған яғын ташлап, ситкә бәхет эҙләп сығып киткән кешеләр ауыҙынан ошолай тип әсенеп әйткән һүҙҙәрҙе йыш ишетергә тура килә. Был — бер «Әлифба»ны ғына түгел, ә үҙ телен, үҙ моңон, үҙ тыуған төйәген һағыныу тойғоһо ла.

Тыуған республикаңда саҡта әсә теленә ҡарата ғәмһеҙлек, битарафлыҡ кисерәһең, ә сит яҡтарҙа ул киреһенсә икән. Бер генә таныш моң, хатта һүҙ ишетеп ҡалһаң да, күңелде һағыш өтөп ала. Әгәр туған телеңдә һөйләшеүсе берәй милләттәшеңде осратһаң, ул иң ҡәҙерле кешеңә әйләнә.

Мин бер нисә йыл инде Силәбе өлкәһенең Минйәр ҡалаһында йәшәйем һәм эшләйем. Тыумышым менән Күмертау яғынанмын.

Минйәр урамдарында үҙ-ара башҡорт телендә аралашҡан кешеләрҙе йыш осратырға тура килә. Ә Башҡортостан ҡалаларында бындай күренеште күҙәтеүе ҡыйын. Аяныслы хәл, әлбиттә.

Мин 1989—90 уҡыу йылынан Минйәр ҡалаһының 1-се, 2-се һәм 4-се мәктәптәрендә башҡорт теленән факультатив дәрестәр алып бара башланым. Уларҙың һәр береһендә сәғәттәр һаны ла, ата-әсәләрҙең балаларына туған телен өйрәтеүгә мөнәсәбәте лә төрлөсә. Мәҫәлән, 2-се һанлы һигеҙ йыллыҡ мәктәптә күп кенә башҡорт балалары уҡый. Тик уларҙың өстән бер өлөшөнән әҙерәге генә башҡорт теле буйынса факультатив дәрестәргә йөрөй. Бының үҙ сәбәптәре бар, ата-әсәләр йыш ҡына шулай ти:

— Беҙҙең балалар былай ҙа үҙ телен һәйбәт белә.

— Ә рус телен һүҙләп белмәй, башта шуны уҡыһын!

Бындай һүҙҙәрҙе ҡайһы бер абруйлы уҡытыусылар, класс етәкселәре ауыҙынан да ишетергә тура килә. Хәҙерге заман уҡытыусыһын бер ҙә ыңғай яҡтан биҙәмәй был.

Ата-әсәләрҙең балаларына ҡарата яуыҙлыҡ эшләргә тырышыуы ғәфү ителмәҫлек күренешкә — халыҡ
нә әйләнә.

Бәғзе балалар са
уҡ үҙ туған теленә
рашта тәрбиәләнә.
улар башҡортса
һөйләшергә оялыу
хатта донъяға ниңә
булып тыуғанына
ҡа милләт балалары
да үҙҙәрен кәм һана
мен, атаһының исеме
лаштырып әйтә.

Иҫеҫ кенә булмаһ
йәрҙә лә балаларына
телен өйрәтергә теләг
әсәләрҙең һаны, минең
берәк. Алдағы йылдар
ҙың тағы ла артырын
вам.

ТЕЛЕ БАРҘЫҢ — ИЛЕ БАР

Алтын тапҡандай шатланды...

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте ун көнлөгөнөң йомғаҡлау кисәһен Тимер урта мәктәбендә бөтә уҡыусылар ҙа көтөп алды. Шулай булмай ни, бөгөн бит ун көн буйы түккән көскә, хеҙмәткә йомғаҡ яһала. Ун көн эсендә һәр класс төрлө темаларға альбомдар сығарырға, үтелгән әҫәрҙәргә иллюстрациялар яһарға, шиғыр бәйгеһе үткәрергә, башҡорт теле тураһында, халыҡ йырҙары, таҡмаҡтар, милли уйындар өйрәнергә өлгөрҙө. Әлбиттә, әҙерлек бер нисә ай алдан башланғайны. Шуға күрә ун көнлөк барышында драма түңәрәгендә ҡатнашыусыларҙың (етәксеһе — башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Ш. З. Бикмөхәмәтов) Шәриф Биҡколдоң «Өмәлә» исемле пьесаһын сәхнәләштереүе лә, «Урал» башҡорт үҙәгенең Бөрйәндә асылған филиалы — «Бөрйән» ойошмаһынан килгән Иҫәнғәлин иптәшең уҡыусылар менән осрашыуы ла ҡыҙыҡлы булды.

...Милли кейемдәге ике ҡыҙ сығып, йомғаҡлау кисәһен шиғыр юлдары менән асты: Гөлсөм Яубасарова Рәми Ғариповтың «Туған тел»ен һөйләһә, Роза Баязитова Зәйнәб Бишеваның «Башҡорт теле»н яттан ишеттерҙе.

Унан һуң шиғыр бәйгеһе башланды; бында һәр кластың еңеүселәре генә ҡатнашты. Жюри ағзаларының билдәләүенсә, 10 класс уҡыусыһы Әхмәтшина Клара менән Бикмөхәмәтова Айһылыу еңеүсе булды.

Иң ҡыҙығы шулай ҙа ике команданың КВН-ы булғандыр. Унда 1-се команда (капитаны — Зөлфиә Яманғолова) еңеүсе булды. Ләкин берәү ҙә үҙен еңелеүсе итеп тойманы.

Шуны ла әйтеп китергә кәрәк, ун көнлөк барышында өлкән класс уҡыусылары араһында башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса олимпиаданың I туры үткәрелгән. Районда үтәсәк II турҙа ҡатнашыу хоҡуғын Гөлсәсәк Баязитова (11 класс) һәм Клара Әхмәтшина (10 класс) яулаған.

Һүҙемде мин 7 класс уҡыусыһы Айгел Ғазинаның «Аҙналыҡ» исемле шиғыры менән тамамламаҡсымын:

Башҡорт теле аҙналығы
Башланып китте беҙҙең.
Викторина һорауына
Яуап яҙабыҙ бөгөн.
Бер уҡыусы шиғыр яҙа,
Икенсеһе — әкиәт.
Өсөнсөһө инша яҙа
Гөж киләбеҙ — акамәт!
Береһе һүрәт төшөрә
Ҡамыр батыр хаҡында.
Икенсеһе йыр өйрәнә
Туған теле хаҡында...
Аҙналыҡ та үтеп киткән
Йомғаҡлау ҙа еткән бит!
Матур шиғыр ҙа һөйләнде.
Ҡобайыр ҙа көйләнде.
Конкурс һүрәттәренә
Урындар билдәләнде.
Ҡобайыр көйләүсеһе лә
Бүләк алып кинәнде.
Бик күңелле тамамланды
Был йомғаҡлау кисәһе.
Алтын тапҡандай
шатланды
Берәү түгел — бөтәһе.

З. ЯУБАҪАРОВА.
Бөрйән районы.

ӘСӘМ ТЕЛЕ МИНӘ - СӘСӘН ТЕЛЕ,-
УНАН БАШҠА МИНЕҢ ХАЛҠЫМ ЮҠ:
ЙӨРӘГЕНДӘ ХАЛҠЫ БУЛМАҒАНДЫҢ
КЕШЕ БУЛЫРҒА ЛА ХАҠЫ ЮҠ!

Рәми Ғарипов

Шарттар булдырырға кәрәк

Бөгөнгө көндә ике теллелек мәсьәләһе күптәрҙе борсой. XIX партконференция һәм КПСС Үҙәк Комитетының сентябрь (1989 йыл) Пленумы ҡарарҙарын тормошҡа ашырыу маҡсатында Салауат ҡалаһында «Аҡбуҙат» милли-мәҙәниәт берекмәһе башҡорт телен өйрәнеү буйынса курстар асылды.

Әлеге ваҡытта Машина төҙөүселәрҙең мәҙәниәт һарайында һәм музыка училищеһында эш алып барыла.

Әле Машина төҙөүселәр һарайына башҡорт теле дәрестәрен өйрәнергә ун бер кеше йөрөй. Курс аҙнаһына ике мәртәбә — шишәмбе, кесаҙна көндәре өсәр сәғәт үткәрелә. Башҡорт телен өйрәнеүселәр араһында төрлө һөнәр кешеләре — уҡытыусы, эшсе, инженер, мәктәп уҡыусылары бар. Барыһы ла боронғо төрки телен ҡыҙыҡһынып өйрәнәләр.

Ләкин был өлкәлә проблемалар ҙа етерлек. Дәрестәрҙе 4-се урта мәктәптең башланғыс кластар уҡытыусыһы Разифа Салауатова алып бара. Ниңәлер үткәргән дәрестәре өсөн ошоңарсы ҡала халыҡ мәғарифы бүлеге аҡса түләмәне. «Аҡбуҙат» берекмәһе, курсты туҡтатмау маҡсатында, үҙ иҫәбенән аҡса түләргә мәжбүр булды.

Күп уҡыусылар русса-башҡортса, башҡортса-русса һүҙлек таба алмауҙарына зарланалар. Бигерәк тә дәрес үткәреү буйынса методик ҡулланмалар юҡ. Эйе, һуңғы ваҡытта «Ленинец», «Советская Башкирия» газеталарында «Башҡорт теле дәрестәре» баҫылып сыға башланы. «Ана шундағы дәрестәр айырым йыйынтыҡ булып баҫылып сыҡһа ине», — ти Р. Салауатова.

Башҡорт телен өйрәнеүселәр менән дә әңгәмә булып үтте. Улар араһында дәрестәрҙе ҡалдырмай йөрөгән пенсионер, элекке уҡытыусы З. Н. Иванова, инженер В. В. Булавинцева үҙ фекерҙәрен әйтеп алды. Зинаида Николаевнаның хатта биш йәшлек ейәнсәре лә башҡорт телен өйрәнеүҙә ҡалышмай икән.

— Башҡорт телен Башҡортостанда йәшәгән бөтә граждандар аҙмы-күпме белһен ине, — тип башлап китте ул һүҙен. — Ә етәкселәр был телдә иркен һөйләшергә тейеш. Уҡыусыларҙың һорауы буйынса курс май айына тиклем алып барыласаҡ.

Музыка училищеһында ике башҡорт төркөмөн 10-сы дөйөм белем биреү мәктәбе уҡытыусыһы Сәриә Ишкинина алып бара. Башҡорт телен өйрәнеүселәрҙең күпселеге — ҡалаларҙа туған теленән мәхрүм ителгән ҡыҙҙар. Шуныһын һөйөнөп билдәләп үтергә кәрәк: училище директоры бында башҡорт телен сит тел өйрәтеү дәресе урынына кереткән.

Әммә ошо яҡшы башланғыс һүрелмәһен өсөн, башҡорт теле уҡытыусыларының ғына энтузиазмы аҙ. Минеңсә, башҡорт теленә дәүләт статусы бирергә, Балтик буйы, Молдавия ваҡиғалары Башҡортостанда ҡабатланмаһын өсөн, был телде өйрәнеүгә бөтә шарттар тыуҙырырға кәрәк.

И. АГИШЕВ,
«Аҡбуҙат» берекмәһе секретары.
Салауат.

бала тәрбиәләнә. Шуларҙың 80 проценты самаһы башҡорттар. Мин балалар баҡсаһы мөдире Р. Хәсәнованан:

— Балаларҙы ниндәй телдә һөйләштерәһегеҙ? — тип һораным. Ул бер ҙә аптырап тормайынса:

— Рус телендә, тип яуапланы. Һәм һүҙен дауам итеп:

— Башҡорт телендә һөйләштерергә юғарынан күрһәтмә юҡ,— тине.

Хайран ҡалырлыҡ эш бит был. Башҡорт балаларын үҙ әсә телендә һөйләшергә өйрәтер өсөн дә үрҙән күрһәтмә кәрәк икән! Ошо турала БАССР Халыҡ мәғарифы министерствоһы ни әйтер?

Я. ШӘМСЕТДИНОВ.
Өфө.

ӘБА»НЫ БИГЕРӘК ҺАҒЫНДЫМ...»

Силәбе өлкәһенең Миңйәр ҡалаһында йәшәйем һәм эшләйем. Тыумышым менән Күмертау яғынанмын.

Миңйәр урамдарында үҙ-ара башҡорт телендә аралашҡан кешеләрҙе йыш осратырға тура килә. Ә Башҡортостан ҡалаларында бындай күренеште күҙәтеүе ҡыйын. Аяныслы хәл, әлбиттә.

Мин 1989—90 уҡыу йылынан Миңйәр ҡалаһының 1-се, 2-се һәм 4-се мәктәптәрендә башҡорт теленән факультатив дәрестәр алып бара башланым. Уларҙың һәр береһендә сәғәттәр һаны ла, ата-әсәләрҙең балаларына туған телен өйрәтеүгә мөнәсәбәте лә төрлөсә. Мәҫәлән, 2-се һанлы һигеҙ йыллыҡ мәктәптә күп кенә башҡорт балалары уҡый. Тик уларҙың өстән бер өлөшөнән әҙерәге генә башҡорт теле буйынса факультатив дәрестәргә йөрөй. Бының үҙ сәбәптәре бар, ата-әсәләр йыш ҡына шулай ти:

— Беҙҙең балалар былай ҙа үҙ телен һайбәт белә.

— Әле рус телен йүнләп белмәй, башта шуны уҡыһын!

Бындай һүҙҙәрҙе ҡайһы бер абруйлы уҡытыусылар, класс етәкселәре ауыҙынан да ишетергә тура килә. Хәҙерге заман уҡытыусыһын бер ҙә ыңғай яҡтан биҙәмәй был.

Ата-әсәләрҙең балаларына ҡарата яҡшылыҡ эшләргә тырышыуы ғәфү ителмәҫлек күренешкә — халыҡ фажиғәһенә әйләнә.

Бөгөн балалар сәңгелдәктән үк үҙ туған теленә кире ҡарашта тәрбиәләнә. Шуға күрә улар башҡортса өйрәнергә, һөйләшергә оялыу ғына түгел, хатта донъяға ниңә башҡорт булып тыуғанына үкенә, башҡа милләт балалары алдында үҙҙәрен кәм һанай. Исемен, атаһының исемен руссалаштырып ебәрә.

Нисек кенә булмаһын, Миңйәрҙә лә балаларына туған телен өйрәтергә теләүсе ата-әсәләрҙең һаны, минеңсә, күберәк. Алдағы йылдарҙа уларҙың тағы ла артырына ышанам.

Эште мин балаларға башҡорт әлифбаһын өйрәтеүҙән башланым. Көндәлек тормошта йыш осрай торған һүҙҙәрҙе яҙыуҙа һәм телмәрҙә ҡулланырға өйрәттем. Беҙ уҡыусылар менән өйҙә тик үҙ телебеҙҙә генә һөйләшергә һүҙ ҡуйыштыҡ. Мин дәрестәрҙә уларҙы халҡыбыҙҙың бай тарихы, ауыҙ-тел ижады менән дә таныштырам. Ҡурайҙа, ҡумыҙҙа уйнарға өйрәтәм...

Хәҙер инде уҡыусыларым башҡортса арыу уҡ уҡый ҙа, шиғырҙар ҙа һөйләй белә.

Ә. ХӘЛИЛОВ,
уҡытыусы.
Силәбе өлкәһе,
Миңйәр ҡалаһы.

ҮТКӘН ЙЫЛ аҙағында «Халыҡ мәғарифын үҙгәртеп ҡороу шарттарында ике теллелек мәсьәләләре» тигән темаға республика фәнни-практик конференцияһы саҡырылды. Унда, айырым алғанда, республикабыҙҙың көнбайыш, төньяҡ төбәктәрендә туған телдәрҙе уҡытыу өлкәһендә етди етешһеҙлектәр булыуы асыҡланды.

БАССР Халыҡ мәғарифы министерствоһы, хәлде урында өйрәнеү өсөн, ошо яҡтағы бер нисә районға үҙенең комиссияһын ебәрҙе. Уның бер төркөмө Балтас районы мәктәптәрендә туған телдәрҙе уҡытыу торошон тикшерҙе. Унда Башҡортостан Яҙыусылар союзының мәктәптәргә шефлыҡ итеү комиссияһы председателе, шағирә Фатиһа Туғыҙбаева, СССР Фәндәр академияһы Урал бүлексәһе Башҡортостан ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты өлкән ғилми хеҙмәткәре, филология фәндәре докторы, башҡорт теленең көнбайыш диалекты тураһындағы монография авторы С. Ф. Миржановалар ҡатнашты.

Нөркә, Көмъяҙы, Түбән Һикияҙ, Яңы Балтас ауылдарында, район техник предприятиеһы эшсәндәре янында көнбайыш башҡорттарының тел үҙенсәлеге, төп башҡорт ауылдарының тарихы хаҡында йәнле әңгәмәләр булды. Осрашыуҙарҙа партия район комитетының идеология бүлеге мөдире Ф. М. Асҡарова менән инструктор Ф. Т. Исламов иптәштәр ҡатнашты. Төркөм ағзаларын партия район комитетының беренсе секретары Р. М. Харрасов иптәш ҡабул итте.

БАССР Халыҡ мәғарифы министерствоһы вәкиле сифатында тикшереүҙә ҡатнашыусы Башҡортостан уҡытыусылар белемен камиллаштырыу институты ассистенты З. Ф. Ғабдрахманова түбәндәге мәҡәләһендә районда туған телдәрҙе уҡытыу торошо менән таныштыра.

БАЛТАС ЯҠТАРЫНДА

Балтас ере — төрлө телле, төрлө тоҫло, үҙенсәлекле яҡ. Бында башҡорт старшинаһы Балтас йәшәгәне, осһоҙ-ҡырыйһыҙ ер биләмәләре тотҡаны билдәле. Нөркә ауылы янында Салауат ғәскәрҙәре менән батша һалдаттары араһында ҡан ҡойошло бәрелештәр була. Ауыл янындағы һаҙлыҡтар эсенән ҡамауҙан сыҡҡанда бик күп баш күтәреүселәр ҡырыла. Нөркә — Салауат һуғышып йөрөгән һуңғы яу нөктәләренең береһе. Тотолғас, Нөркә батырҙы һуҡтырыуҙың һуңғы урыны ла була.

Был төбәктә күренекле әҙип, башҡорт халҡының революцияға тиклемге әҙәби мираҫын яҙыусы, профессор Әхнәф Харисов, тарихсы Әбүбәкер Усманов (Имән ауылы) тыуған.

Ә. Усмановтың төп хеҙмәте XVI быуатта башҡорт ырыуҙарының Рәсәйгә ҡушылыуына арнала. Тарихсы билдәләүенсә, ошо осорҙа Башҡортостанға бик күп Кама, Волга буйы халҡы ағыла. Улар башҡорттар менән йәнәш ултыра, ерле халыҡ килеүселәрҙе кире бормай. Ҡатмарлы ваҡиғалар, төрлө үҙгәрештәр кисерһәләр ҙә, килгән халыҡтар бербереһенең ҡайғы-шатлығын бүлешкәндәр, йыр алмашҡандар, тел-лөғәт ҡатыштырғандар.

Бөйөк Октябрь революцияһына тиклем бында уҡытыу эштәре иҫке төрки телендә, революциянан һуң инде рус, татар телдәрендә алып барыла. Бындағы башҡорттарҙы үҙ туған телдәренә кире ҡайтарыу, уларҙы үҙ әсә телдәрендә уҡытыуға мөмкинлектәр тыуҙырыу мәсьәләһе урындағы халыҡ, йәмәғәтселек тарафынан күп тапҡырҙар күтәрелһә лә, етмешенсе йылдар һуңына саҡлы эш урынынан ҡуҙғатылманы. Етмешенсе йылдар һуңында көнбайыш Башҡортостан төбәктәрендә йәшәүсе башҡорттарҙы туған телдәренә өйрәтеү мәсьәләһе ошо яҡтан сыҡҡан партия, совет хеҙмәткәрҙәре һәм фән, мәҙәниәт эшмәкәрҙәре тарафынан йәнә күтәрелде. Был мәсьәләләр Башҡортостан партия Өлкә Комитетында ла ҡаралды.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, игелекле, изгелекле теләктәрҙән сығып эшләнгән эш, ихлас күңелдән уйланған уй артабан етәкселектең бойороҡ-административ алымдар менән артыҡ мауығыуы арҡаһында юҡҡа сығарылды. Башҡорт телен өйрәнеү бер ниндәй әҙерлекһеҙ, аңлатыуһыҙ башланды. Ерле халыҡтың йәшерәк быуыны ата-баба тарихын, хатта ҡайҙан килеп сығыуын, ырыу-затын белмәй ине. Торғонлоҡ йылдарында үҙ телен, затын дөрөҫ атарға ҡурҡҡан саҡта, милләтсе мөһөрө модала мәлдә, йәш быуындың милли аңы ҡайҙан үҫһен! Өҫтәүенә, ҡайһы бер төбәктәрҙә, халыҡ менән килешмәйенсә, тотошлай районлап башҡорт теле уҡытыу индерелде. Ул татар теле менән йәнәш түгел, ә уның урынына уҡытылды. Был хәл, әлбиттә, төп татар ауылдарына ла ҡағылды. Ошо сәбәптәр арҡаһында ҡайһы бер ерҙә халыҡтың бер өлөшөндә урынлы ризаһыҙлыҡ тыуҙы.

1987—88, 1988—89 уҡыу йылдарында киреһенән, өҫтән баҫым яһау юлы менән, бер ниндәй әҙерлекһеҙ, аңлатыуһыҙ ябай этик тактты ла онотоп, районлап татар теле уҡытыуға күсереү башланды. Татар теле йәнә республикаға исем биргән халыҡ — башҡорт теле менән йәнәш түгел (бында беҙ татар телен — туған тел, ә башҡорт телен — предмет булараҡ уҡытыуҙы күҙ уңында тотабыҙ), ә уның урынына керетелде.

Балтас районында 33 мәктәптә башҡорт теле (предмет булараҡ) уҡытыу индерелгән була, башҡа предметтар: география, тарих, математика һ. б. рус телендә алып барыла. Шунан йәнә бөтә 33 мәктәптең беренсе класында башҡорт теле урынына татар теле уҡытыу индерелә. Был киләсәктә бер мәктәптә лә башҡорт теле уҡытылмаясаҡ тигән һүҙ.

Көндәшле урта мәктәбе тәүгеләрҙән булып беренсенән унынсы класҡа тиклем тотошлай башҡорт теле урынына татар теле уҡытыуға күсә. Район етәкселәре уны эксперимент тип атай, ләкин быны ойоштороуҙа ҡатнашыусыларҙың исем-фамилиялары ла, акт та, протокол да юҡ. Ата-әсәләр йыйылыштарының протоколдарында ла бер төрлөлөк күҙгә салына. Ураҙ урта мәктәбендә йыйылыш 1987 йылдың 5 октябрендә үтә. Көн тәртибе туранан-тура: «Татарса уҡытыуға күсеү» тип атала. Йыйылышта ҡатнашыусы РОНО вәкиле М. Ахунов үҙ сығышында Көндәшле, Иҫке Тимкә, Богдан мәктәптәре башҡорт теленән татар теленә күсте инде, ти... Иҫке Тимкә урта мәктәбе директоры Х. Солтанов та, бөтә кластарҙа ла бер юлы күсәйек, тип тәҡдим индерә. Әйткән һүҙ — атҡан уҡ. Директор тәҡдимен дә индерә — Ураҙҙа ла, Иҫке Тимкәлә лә бөтә кластар бер юлы бер көндә икенсе телдә уҡыуға күсә. Йыйылышта иһә ата-әсәләрҙән З. Мөслимова, У. Дәүләтшин кеүектәрҙең фекере иҫәпкә лә алынмай.

Әйткәндәй, районда татар телен уҡытыуға ла иғтибар етешмәй. Көнтүгеш һигеҙ йыллыҡ мәктәбендә уны физкультура уҡытыусыһы, Зиләзекүл урта мәктәбендә сит тел уҡытыусыһы, Текән, Асау һигеҙ йыллыҡ мәктәптәрендә татар телен башланғыс класс уҡытыусылары өҫтәлмә сәғәт итеп алып бара. Татар теле буйынса районда ни бары ун ике юғары белемле уҡытыусы, башҡорт теле буйынса — берәү. Шуға ҡарамаҫтан, 1987 йылдың октябренән 1988 йылдың октябренә тиклем биш башҡорт теле уҡытыусыһы (Ҡарғалы, Иҫке Тимкә, Иҫке Янбай, Көмъяҙы мәктәптәре) эшенән бушатылған. Көмъяҙыла бөгөн башҡорт теле лә, татар теле лә уҡытылмай.

Айырым етәкселәр (улар иҫәбенә РОНО мөдире Р. Закиров иптәш тә инә) XIX Бөтә Союз партия конференцияһы резолюцияһындағы «урындағы республикаға исем биргән халыҡ телен өйрәнеүҙе хупларға» тигән положениеһы бик «хуплап» бармай. Уларға, мәҫәлән, түбәндәге хәҡиҡәтте лә яңынан иҫбатларға кәрәк: районда ун биш аҫаба башҡорт ауылы, ун биштән ашыу ҡатнаш халыҡ йәшәгән ауыл бар.

Төп башҡорт ауылы Түбәнге Һикияҙҙы алайыҡ. Бында һигеҙ йыл башҡорт телен предмет булараҡ өйрәнгәс, 1988—89 уҡыу йылында татарса уҡыуға күсәләр. Мәктәп директоры З. Мифтахов туған телде уҡытыуҙы туҡтатмау яғында тора. Уныңса, телде өйрәтеүҙең формаларын, алымдарын камиллаштырырға кәрәк. Әсә теленең дәреслектәрҙә бирелгән әлеге грамматикаһы өйрәнеү өсөн ауырыраҡ, тип иҫәпләй ул.

Түбәндәге һандарға иғтибар итәйек. 1988—89 уҡыу йылында башҡорт телен предмет булараҡ уҡытыу төньяҡ-көнбайыш, көнбайыш төбәктең 330-ға яҡын (был рәсми иҫәпләүҙәр буйынса) мәктәбендә туҡтатылды. Дүртөйлө, Борай, Илеш, Туймазы, Саҡмағош ише райондарҙа ул бөтөнләй тиерлек уҡытылмай.

Эйе, беҙ бындай хәлдәргә күнегеп бөткәнбеҙ тиерлек: тик 1973—74 уҡыу йылында ғына 420 башҡорт, 112 татар мәктәбендә уҡытыу тотошлай рус теленә әйләндерелә. Был — элек ине, ә хәҙер?.. Беҙ әүәл бөтә ғәйепте торғонлоҡ йылдарына ауҙарҙыҡ, ә хәҙер?.. Әлеге күренеште республикабыҙҙың төп халҡына ҡарата ғәҙел мөнәсәбәт тип әйтеп буламы? Ғөмүмән, әлеге хәлде ни тип атарға?

Шуның өсөн, беҙҙеңсә, иң тәүҙә көнбайыш Башҡортостанда туған телде уҡытыу мәсьәләләре буйынса республика фәнни-практик конференцияһын саҡырыу маҡсатҡа ярашлы булыр ине. Икенсе мәсьәлә: һәр төрлө саралар, конференциялар, ваҡытлы матбуғаттағы сығыштар ғына туған телде киләсәк өсөн һаҡлауға булышлыҡ итмәйәсәк. Беҙ әлегә телебеҙҙе ҡотҡарып алып та ҡалдыҡ, ти, ләкин йөҙ, йөҙ илле йылдан һуң уның тағы ла аянысыраҡ хәлдә ҡалыуы ихтимал. Шуға БАССР Верховный Советы Президиумы тел тураһында закон ҡабул итергә һәм республика Конституцияһында тел статусын билдәләргә, асыҡларға тейеш. Тел тураһындағы закон туған телде киләсәк быуындар өсөн дә һаҡлап ҡалыуға булышлыҡ итәсәк. Әгәр беҙ артабан да ҡул ҡаушырып ултыра бирһәк, ваҡиғалар ағышына елгәрмәһәк, тотош бер халыҡтың йөҙөн, хатта киләсәген юғалтыуыбыҙ бик тә мөмкин.

СТУДЕНТ КӨНДӘЛЕКТӘРЕ

9 декабрь, 1952 йыл.

Комсомол комитеты ултырышы булды. Алексей Ласурна менән Крахмальникованың шелтәләрен төшөрҙөк.

Рус булмаған студент группалары тураһында һөйләшеү булды. Дәреслектәребеҙ — мәктәп китаптары! Ҡайһы бер студенттар тырышмай, дәрескә әҙерләкһеҙ йөрөйҙәр, йә бөтөнләй лекцияға килмәйҙәр. Һүҙлек алып бармайҙар. Тел өйрәнеүҙә һүҙлекһеҙ эшләп булмай. Ҡайһы берәүҙәр әҙәбиәтте бик аҙ уҡый. Бөтөнләй уҡымағандар ҙа бар. Әхмәтов Фирүз быйыл тик Сельвинскийҙың лирикаһын һәм Тихонов шиғырҙарын ғына уҡыған! Яҙыусы! Программа материалдарын ғына уҡыусылар бар. Күптәр китап өҫтөндә эшләй белмәй. Үҙ алдыңа эшләй белеү — иң кәрәклеһе.

Рус иптәштәр яңылыш һөйләүселәрҙе төҙәтмәй. Һүҙҙәрҙең баҫымдарына иғтибар юҡ. Рус телен өйрәнеү — һәр милләт студенты өсөн талапҡа әйләнергә тейеш.

Шағирҙар — тик шиғыр, прозаиктар тик проза ғына уҡый. Улай ярамай.

Жора Исаев үткән комсокомитетта отчет бирергә тейеш ине, ләкин үҙе билдәләгән көнгә килмәне. Тәртип боҙа. Эшендә ныҡышмал, эҙмә-эҙлекле түгел. Йыйылыштарҙа яндырғыс телмәрҙәр тота, аҙаҡ һүнә. Жора шым ғына ултырҙы. Йыйылыш алдында дөйәләй ине, хәҙер төймәләй генә ҡалды.

Һөйләшеү файҙалы булһа кәрәк.

11 декабрь, кесаҙна.

«Марксизм-ленинизм классиктары әҙәбиәт тураһында» тигән темаға теоретик конференция тамамланды. Ижади семинарҙа Иван Ганабин шиғырҙары тикшерелде. Поезда ҡайтҡанда «Совет Башҡортостаны»нан Ж. Кейекбаевтың «Һөнәр диалекты» тигән ҙур мәҡәләһен уҡып ҡайттым. Тел мәсьәләһенән ситтә булған проблемалар ҡатышһа ла, мәҡәлә ҡыҙыҡлы. Ул күтәргән башҡа мәсьәләләрҙең береһе — күрше өлкәләрҙәге башҡорттарға мәҙәниәт ярҙамы күрһәтеү. Тел, әҙәбиәт һәм тарих институты тураһында мөһим фекерҙәр бар. Тик был туралағы мәсьәләне айырым бер мәҡәләлә күтәреп сығырға кәрәк ине.

12 декабрь, йома.

Горький буйынса спецкурстың семинарын бөтөрҙөк. Казарян «Горький һәм әрмән әҙәбиәте» тигән темаға аҡыллы доклад яһаны.

Горький күп башлап яҙыусылар менән бәйләнештә торған. Уның Т. Ахумянға яҙған хаты ҡыҙыҡлы. Рус матбуғатында шиғырҙары баҫылғас, Ахумян бер саҡ Горькийҙан открытка ала: «Летопись» журналы адресына минең исемгә зинһар шиғырҙарығыҙҙы ебәрегеҙ. А. Пешков». Ахумян, әлбиттә, шулай эшләй. Бер аҙҙан Горькийҙан хат ала: «Әлбиттә, һеҙ яҙырға һәм күп яҙырға тейеш. Әммә шул тиклем үк һеҙгә тормошҡа яҡын булыу зарур... Үҙ-үҙегеҙгә бикләнмәгеҙ, ә бөтә донъяны үҙегеҙгә туплағыҙ. Тормоштоң ағыуы күп, әммә унда бал да бар — шул балды табығыҙ. Ҡоро лирик кенә булмағыҙ, йәнегеҙҙе үҙегеҙҙең ҡулдар менән төҙөгән ситлеккә бикләмәгеҙ, һәм сатирик, һәм прозаик, ғәҙәттәге шат бер кеше булырға ла батырсылыҡ итегеҙ. Бөтәһен дә алырға һәм кешеләргә бирергә кәрәк. Замандың күпселек йәш шағирҙары кеше аяғы баҫмаған утрауҙарҙа, тормоштан һәм уның хаосынан ситтә йәшәй. Был, әлбиттә, ысынбарлыҡ сыуалышында йәшәүгә ҡарағанда, еңелерәк тә, уңайлыраҡ та. Әммә үҙ-үҙеңде ярлыландырыу, урлау был. Робинзон булырға кәрәкмәй. Йәшәргә — шауларға, көлөргә, әрләшергә, яратырға кәрәк. Әлегә табылмаған нәмәне — яңы һүҙ, яңы рифма, яңы образдар табырға кәрәк. Шағир — ул донъя шаңдауы, ә үҙ күңелен генә түйындырыусы түгел. Бына шулай. Һеҙгә иң һәйбәт теләктәр менән А. Пешков».

1934 йылда Ахумян Горькийҙың Мәскәү эргәһендәге дачаһында була. Горький уны шатланып ҡаршы ала: «Бына һеҙ ниндәй! Һеҙҙе мин тап ошолай... оҙон буйлы итеп күҙ алдыма килтергәйнем дә. Эйе, мин күптән иғтибарға алдым, оҙон кешеләр лирик була. Мин дә шундай инем... Һәм күптәрҙе беләм — Ромэн Роллан, Чехов... Аҙаҡ тормош килтереп һуға, һыныңды бөкләй...»

Ахумяндың нимә өҫтөндә эшләгәнен белешеп, Горький уға ошондай кәңәш бирә:

«Төрлө яҡҡа ташланмаҫҡа өйрәнергә кәрәк Сәнғәт быны яратмай. Ул көнсөл...»

Горькийҙың Әрмәнстан һәм әрмән халҡы тураһында әйткәндәре лә йылы һәм йөрәктән сыҡҡан һүҙҙәр: «Һеҙҙең илегеҙ хозур! Мин һеҙҙең тауҙарығыҙҙы күрҙем — ғорурҙар! Кешеләре лә шундай уҡ! Бынамын тигән кешеләр! Уларға ауыр яҙмыш насип булған, әммә улар үҙ ҡайғыһын хаяһыҙҙар донъяһынан йәшерә белә, йырлай алалар. Һеҙ ҙә шундай уҡ булығыҙ! Көлөгөҙ, йышыраҡ йырлағыҙ — дошмандарға һәм ҡаршылыҡтарға үс итеп! Күңелегеҙ, йөрәгегеҙ менән йәш булығыҙ! Йәшлек — ул ҙур нәмә!»

Бөгөн Ермиловтың Гоголь тураһындағы китабы тикшерелә.

Гоголь халыҡсан. Тормош дөрөҫлөгөн асыусы. Халыҡ поэзияһын, ижадын бөтә йөрәктән тоя белеүсе. Үҙенә генә хас комизм менән халыҡ фажиғәһен күрһәтеүсе. Гоголдә шул тиклем тәбиғилек, ябайлыҡ, һоҡланырлыҡ матурлыҡ бар. Уның әҫәрҙәрен уҡығанда, ҡапыл ғына бер тойғонан икенсеһенә күсәһең. Әле генә шатланһаң, ҡапыл моңһоу була. Ул халыҡ аҡылының тапҡырлығы менән көлә белә. Гоголь йырлай. Гоголь лирик. Гоголь теле — йыр. Уның көлөүө — халыҡ көлөүө. Бөтә әшәкелектән юғары торған көлөү. Унда киләсәккә өмөт, арҡаһын баҫып торған ғазап тауын дер һелкетеп ауҙарып ебәрерлек көс бар. Был көс — Гоголь көсө. Ул рәхимһеҙ тантана менән ҡәбәхәтлектән, түбәнлектән көлә.

Ермилов китабының етешһеҙлектәре: авторға һәр саҡ дөрөҫ тон һаҡлау етешмәй. Ул Гоголдең идея ҡаршылыҡтарын да томалап ҡалдыра. Гоголде революционер яһап ебәреп, дөрөҫ булмаған юлға төшөп китә. Быны менән ул юбилей мәҡәләләренә яҡыная. Ермиловтың раҫлауына ышанғанда, Гоголде иҙелгән халыҡ йырсыһы итеп күрергә тейеш булабыҙ. Был дөрөҫ түгел. Гоголдең ҡаршылыҡтарын томалаған хәлдә, беҙ Белинскийҙың уға яҙған хатына ышанмаҫҡа тейешбеҙ. Гоголдең, бөйөк художниктың, реакцион фекерләүсе икәнлеген дә инҡар итәбеҙ. Ярамай.

Әлбиттә, Ермилов китабы Гоголь тураһындағы бүтән хеҙмәттәрҙән күпкә өҫтөн. Ул һәр саҡ уҡыусыны тоя.

Китапта Белинскийҙың Гоголгә яҙған хаты булмауы ғәжәпкә ҡалдыра. Ә был хаттан башҡа Гоголь тураһында тулы һөйләп булмай.

Ермиловтың лакировкаһы уның Чехов хаҡындағы китабында ла бар. Ул Чеховты революционер яһай. Ә беҙ уның революциянан алыҫ тороуын яҡшы беләбеҙ. Чехов — демократ. Һуңғы көндәренә тиклем шулай була. Ә быға күҙ йоморға кәрәкмәй.

Беҙҙең институт үҙ баштары менән уйлай торған әҙәбиәтселәр үҫтерә. Казарянға ҡарайһың да әрмән әҙәбиәте менән ҡыҙыҡһынаһың. Арнальд Тамм менән беҙ беренсе курстан уҡ фекерҙәштәр. Эстон халҡын уның аша күрергә теләйем. Ул үз халҡының бөтә яҡшы сифаттарын үҙендә йыйған кеүек. Тыныс ҡына, ләкин үҙендә әллә күпме тынғыһыҙ фекер йөрөтә! Вадим Зубаревты тыңлау һәр саҡ ҡыҙыҡ. Фекер йөрөтөүе аҡыллы. Ғөмүмән, мин кешеләрҙе күҙәтеүҙән рәхәтлек табам.

Ләкин үҙемә иң яҡын булған бер дуҫымдан ҡәнәғәт түгелмен. Һәр бер һөйләшеүендә, хәрәкәтендә, минең кем икәнде күрһендәр, тип үҙенең ҙурлығын белдерергә тырышып, йоҡ өҫтөнә менеп баҫҡан ҡырмыҫҡа ҡыланышын күргән кеүекмен. Быны күреү ауыр һәм уңайһыҙ. Шиғыр башын әйләндерҙе егеттең... Барыһы ла яһалма, ят.

(Дауамы. Башы 1—6-сы, 11—15-се, 19—33-сө һандарҙа).

• Почтанан

ЯРҘАМ ҠУЛЫН КЕМ ҺУҘЫР?

Газета уҡыусыларҙың һәр береһе нәүбәттәге һанды ҡулына алғас та иғтибарын беренсе сиратта уның төҙөлөшөнә, фотоһүрәттәрҙең асыҡ, матур сығыуына йүнәлтәләр, моғайын. Әлбиттә, таҙа газетаны уҡыуы ла күңеллерәк. Ә түҙемһеҙләнеп көткән газетаңдың ваҡытында килеп етмәүе һәр кемдең кәйефен ҡыралыр. Һуңғы ваҡытта белореттар «Урал» газетаһының бер нисә һанында «Газета типография ғәйебе менән һуңлап сығарыла», тигән яҙыуҙы күргәндәрҙер. Эйе, бындай хәл йыш ҡына ҡабатланып тора. Газетаның ваҡытында сыҡмауы «Урал» газетаһы хеҙмәткәрҙәрен генә борсомай. Килеп тыуған ҡыйынлыҡтар типография етәкселәрен дә хәүефкә һала. Сөнки газета үҙ ваҡытында уҡыусыларына барып етмәһә, уҡыусыларыңды юғалтыуҙы көт тә тор.

Типография директоры Б. В. Устинов бына нимә һөйләй:

— Типография бинаһы ныҡ иҫкергән, емерек хәлдә. Бер нисә йыл элек бинаға ремонт үткәрелде. Әммә иҫке бинаның бер ерен ямаһаң, икенсе яғы һүтелергә тора. Яңы типография төҙөү тураһында нисәнсе йыл инде һүҙ алып барыла! Күпме шулай дауам итер, билдәһеҙ... Госкомиздаттан да, ҡала башҡарма комитетынан да тейешле ярҙам юҡ. Ә план буйынса быйылғы йылда беҙ яңы типография бинаһын файҙаланыуға тапшырырға тейешбеҙ. Бина һалыу өсөн бөтәһе 721 мең һум аҡса бүленгән. Был сумманың 420 меңе төҙөлөш-монтаж эштәренә, ә 230 меңе полиграфия ҡорамалдары һатып алыуға китергә тейеш. Әлеге көндә 250 мең урынына 12 мең һум ғына үҙләштерелгән.

Шулай уҡ хәреф йыйыу машиналары, баҫыу станоктары ла насар хәлдә. Бер-бер артлы сафтан сыҡҡан машиналарҙы ремонтсылар төҙәтеп өлгөрмәйҙәр. Госкомиздат ҡорамалдар һәм запас частар менән насар тәьмин итә. Был иһә эште тотҡарлауға килтерә. Мәҫәлән, Н-7, Н-14, хәреф йыйыу машиналары хәҙер инде күптән производствонан алынған. Ә беҙ әле лә улар менән эш итәбеҙ. Фотонабор, офсет тураһында хыялланабыҙ ғына. Былар бөтәһе лә яңы бина төҙөлгәс кенә ғәмәлгә ашасаҡ. Башҡа цехтарҙа ла шул уҡ хәл. Шунлыҡтан эшселәр ҙә һәр саҡ етешмәй. Эшкә урынлашҡандары ла оҙаҡ тормай, тиҙерәк китеү яғын ҡарай. Кеше етешмәү сәбәпле лә газета һуңлап сыҡҡан осраҡтар бар. «Урал» газетаһынан башҡа «Белорецкий рабочий», «Вперед», Бөрйән районы газетаһы «Таң» да беҙҙә баҫыла. Йыш ҡына үҙемә лә машина артына ултырырға, станоктарҙы ремонтларға тура килә. Хәлдән килгәнсә типография хеҙмәткәрҙәренең эш шарттарын яҡшыртырға тырышабыҙ, әммә өҫтән ярҙам аҙ.

Типографияла төп эшсе көстө ҡатын-ҡыҙҙар тәшкил итә. Уларҙың эше еңелдән түгел. Эш зарарлы, ҡурғаш, типография буяуы менән бәйләнгән, ауыр-ауыр формаларҙы, гранкаларҙы күтәреп йөрөү ҙә улар өҫтөндә. Ошо ауыр эш шарттары, ҡорамалдарҙың насар хәлдә булыуы, кәрәкле запас частарҙың бөтөнләй булмауы уларҙың кәйефендә лә сағыла. Йыл әйләнәһенә тиерлек печатниктар эшләгән аҫҡы ҡатта иҙәндән һалҡын бәреп тора, йылы итек киймәһәң, һалҡын алыуыңды көт тә тор. Йәй көндәрендә цехтарҙа тынсыу, туҙан. Урын етмәү сәбәпле машиналар бер-береһенә терәлеп үк тора.

— Күптән түгел минең машина ултырған ерҙең түбә таҡтаһынан һыу аға башланы,— ти ҡыҙҙарҙың береһе.

Эйе, бындай осраҡтар ҙа юҡ түгел. Ә әгәр ҙә инде түшәмдәрҙе тотоп торған терәүҙәр ысҡынһа... Бының һөҙөмтәһе лә икенсерәк буласаҡ, әлбиттә.

Юғарыла әйтелгәнсә, типографияла эшләүселәрҙең *күбеһе — йәш ҡыҙҙар. Тор*мошҡа сыҡҡандары ла байтаҡ. Уларҙы торлаҡ менән тәьмин итеү ҙә насар. Белорет ҡала Советы башҡарма комитеты 1980 йылда бер бүлмәле квартира бүлде бүлеүен, уныһын да эш Мәскәүгә барып еткәс кенә ала алдыҡ. Шулай уҡ типография эшселәренә 1979—1990 йылдарҙа берәр бүлмәле 4 кооператив квартира бүленде. Әммә был бик аҙ.

— Беҙгә, бигерәк тә яңы эшләй башлағандарға, планды үтәүе ауыр. Эштән ҡалып, йәки шәмбе көнө эшләгән ваҡыттар йыш була. План тулмаһа, аҡсаһы ла аҙ, премиялар ҙа түләнмәй,— тип зарлана ҡыҙҙар. —Директор Борис Васильевич беҙгә ошо йылдың 5 майын — Матбуғат көнөн яңы типографияла ҡаршыларға вәғәҙә бирҙе.

Эйе, өҫтән-аҫҡа ҡарай вәғәҙәләр яуып ҡына тора.

Типография бинаһы емерелеп төшмәҫ элек, ниңә яңы бинаны төҙөүҙе тиҙерәк хәл итмәҫкә? Ең һыҙғанып, ошо эште яҡын арала, оҙаҡҡа һуҙмайынса тормошҡа ашырһындар ине.

С. МИНҺАЖЕТДИНОВА.

Белорет.

Бабичтың ҡәберен эҙләйек

Күренекле шағир һәм үткер сатирик Шәйехзада Бабичты 1917 йылда Ырымбур ҡалаһына «Ҡармаҡ» исемле сатирик журналға эшкә саҡыралар.

Ләкин оҙаҡламай илдә граждандар һуғышы башланып китә һәм Ш. Бабич ошо ваҡиғалар үҙәгендә ҡала. Башында Зәки Вәлиди торған «Башҡорт хөкүмәте» менән яҡынлаша. 1919 йылдың февралендә Бабич башҡорт ғәскәрҙәре менән бергә Ҡыҙыл Армия яғына сыға һәм Башревком эргәһендәге башҡорт совет матбуғатының сотрудниғы булып эшләй. 1919 йылдың 28 мартында, Темәстән Мораҡҡа Башревкомдың типографияһын күсереп алып килгән саҡта, Шәйехзада Бабичтың ғүмере фажиғәле рәүештә өҙөлә.

Өлкән быуын кешеләренең һөйләүенсә, Бабич Йылайыр ауылы эргәһендә үлтерелә һәм шунда уҡ ерләнгән.

Хөрмәтле газета уҡыусылар, бәлки һеҙҙең арала был урынды белеүсе һәм күренекле башҡорт шағирының ҡәберен табыуҙа ярҙам итә алырлыҡ кешеләр барҙыр? Бабичтың яҙмышы тураһында нимә лә булһа белеүсе кешеләрҙән «Йәшлек» газетаһы редакцияһы аша хәбәр итеүҙәрен һорайбыҙ.

В. ИШЕМҒОЛОВ.

ЕР ТЕТРӘҮЕ ИХТИМАЛМЫ?

БАШҠОРТОСТАНДА, атап әйткәндә, Өфөлә ер тетрәүе ихтималмы?

Аңыҙ көндә йәшен һуҡҡандай: «Тиҙҙән Өфөлә 10 балл көсөндә ер тетрәйәсәк икән, халыҡтың 30 проценты ғына иҫән ҡала, имеш, тип ишеттем...» Береһенән-береһе ҡурҡыныс хәбәрҙәр яҡтылыҡ тиҙлегендә тарала. Имеш, болгар күрәҙәсеһе Ванга, Өфө ер аҫтына китәсәк, тип әйткән... Ер тетрәйәсәк көндәр ҙә атап әйтелә. Минең күҙ алдыма емерелеүсе йорттар, тереләй ергә күмелеүсе кешеләр килә...

Ә шулай ҙа ни өсөн тарала был имеш-мимеш?

«Военные знания» журналының быйылғы 1-се һанында Киевтан ер тетрәүҙе аналитик метод менән алдан билдәләүсе геофизик Эмма Ивановна Несмеянович тураһында материал баҫылған. Был яңы ысул геофизика һәм астрономия фәндәренең киҫешкән нөктәһендә яралған. Мәҡәләнән шуны беләбеҙ: «Ер катаклизмдарының сер асҡысы был планетаның тәрән ҡатламдары эсендә генә түгел, ә йыһан менән дә бәйле. Метод ҡояш системаһындағы бөтә физик поляларҙың үҙ-ара бәйле һәм был процестың һәр саҡ хәрәкәттә булыуына нигеҙләнә».

Һуңғы 12 йылда Несмеянович ер тетрәйәсәге, һәләкәтле вулкандар атыласағы хаҡында 30 яҙма прогноз эшләгән, шуларҙың 82 проценты фажиғәле расланған! Улар иҫәбендә Әрмәнстандағы ер тетрәү ҙә, Чернобыль афәте лә, Оло Тәләк янындағы продукт үткәргесендәге шартлау ҙа инә...

Мәҡәләнән юлдар: «Былтырғы йылдың синусоидаһы менән (ә был график Укрглавгеологияла ғинуарҙа теркәлгән, шуға күрә эш уҙғас бер төрлө лә төҙәтмәләр булыуы мөмкин түгел) төньяҡ киңлектәге һыу аҫты кәмәләрендәге авариялар көндәре, Яҡутстандағы ғинуар ҙа, апрель дә алдан әйтелгәйне. Экстреманың юғары нөктәһе — Өфө (продукт үткәргесендәге шартлау көҙ уңында тотола — С. Ғ.)

Һүҙ әлегә, әйе, үтеп киткән афәт хаҡында. Унда Өфөлә фараз ителгән ер тетрәүе тураһында «өҙөп кенә» бер ни ҙә әйтелмәгән. Һүҙ апрель—июль айҙарында илдең тектоник хәүефле урындарында 8—10 балл көсөндә һәләкәтле ер тетрәүҙәр буласағы хаҡында бара...

Тимәк, шуны асыҡларға кәрәк: Көньяҡ Урал тектоник хәүефле зонамы, юҡмы?

СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан фәнни үҙәге Урал бүлексәһенең Геология институты директоры, фән докторы М. А. Камалетдинов: «Урал тауҙары миллионлаған ауыштарҙан (надвиг) тора, уларҙың ҡайһы берҙәре «тере», һәм билдәле бер осорҙа ҡуҙғалырға мөмкин (әйткәндәй, 1990 — ҡояштың ғәҙәттә булмағанса актив йылы). Әммә ер тетрәүҙе алдан әйтеү өсөн районларҙың сейсмик картаһы кәрәк. Ә беҙҙә ул юҡ. БАССР Министрҙар Советы бындай эштәргә аҡса бүлмәй. Сөнки бындай картаны төҙөү өсөн йылына 50 мең һумлыҡ сығым кәрәк. Иғтибар итегеҙ: Әрмәнстандағы ер тетрәү, ҡорбандарҙы иҫәпкә алмағанда ла, 13 миллиард һум зыян килтерҙе: 25 мең кеше Спитакта үлде, 500 мең йортһоҙ ҡалды. Тимәк, стихиялы афәттәрҙе алдан белергә тырышыу мотлаҡ. Әммә әлегә беҙ бер нәмә лә белмәгәнебеҙҙе генә беләбеҙ.

Фән докторы, структуралы геология лабораторияһы мөдире Ю. В. Казанцевҡа мөрәжәғәт итәм:

— Өфөләргә хәүефләнергә шулай ҙа нигеҙ бармы?

— Өфө ер аҫтына китәсәк, тигән хәбәр урынһыҙ. Ҡала аҫтында ундай уҡ оло бушлыҡтар юҡ. Әммә, минеңсә, Несмеянович мәҡәләһендә барыһы ла дөрөҫ. Ысынлап та, беҙ йәшәгән был донъяла бөтә нәмә лә бер-береһе менән бәйле. Ер аҫты тыныслығын һәр боҙоу тетрәүҙәргә килтереүе мөмкин. Ә беҙ нефть һурҙырабыҙ, ер аҫтын шартлатабыҙ. Актив тектоник ярыҡтар төңгәленә атом станциялары килтереп төҙөйбеҙ...».

Ә профессор, геология-минералогия фәндәре докторы Варвара Львовна Яхимович тағы аныҡыраҡ әйтте:

«Асылда Өфөлә ер тетрәү ихтималын кире ҡағып булмай. Сөнки ҡаланан көнсығыштараҡ таулы Уралдың алғы сырыштары сигендә, ситке боғолош ауышында, ер ҡатламының ҙур ярығы, дөрөҫөрәге фронталь серияһы үтә. Ошондай бер ауыш Өфөнән көнбайыштараҡ, Ағиҙел йылғаһы үҙәне буйлап үтә һәм ҡала уның өҫкө ҡалҡып торған ҡанатында ултыра, уның аҫтында — карст күнгүр гипстары, улар араһында буш, ҡыуыш урындар бар. Әгәр ҙә тектоника активлаша ҡалһа, ә һуңғы йылдарҙа был хәл союздың төрлө төбәктәрендә күҙәтелә, беҙҙең тектоник ярыҡтарҙың да хәрәкәткә килеүе ғәжәп булмаясаҡ. Шул саҡта ер тетрәргә һәм ошоға бәйле ҡазалар булырға бик мөмкин: беренсенән, карст емереклектәре, икенсенән, беҙҙең Өфөлә зарарлы производстволар күп, уларҙың шартлауы ихтимал. Әшә (Оло Тәләк) ауышында булған кеүек, газ һәм нефть үткәргес торбаларҙың шартлауы бар.

Бәлә шунда, Башҡортостан атом станцияһын ошондай күренештәрҙе иҫәпкә алмай төҙөйҙәр. Бындай ҡарарҙарҙы хәл итеүсе сейсмик станциялар иһә беҙҙә юҡ.

Каспий һәм Баренц диңгеҙҙәре араһындағы бөтә йылғаларҙың да тектоник йөйҙәр буйлап аҡҡаны асыҡ. Был йөйҙәр ваҡыт-ваҡыты менән хәрәкәткә килә. Әммә был процесты күҙәтмәйенсә, һығымталар яһап булмай. Ер тетрәүҙе алдан иҫкәртеп булырына мин ышанам. Әммә беҙ быға әҙер түгелбеҙ, сөнки «тома наҙанбыҙ».

Шулай итеп, Башҡортостанда, атап әйткәндә, Өфөлә, ер тетрәү ихтималы инҡар ителмәй. Беҙҙең төбәктә тәбиғәттең бындай ҡазалары тураһында тарихи дәлилдәр ҙә бар. Хәйер, Геология институты хеҙмәткәре Р. К. Шакиров раҫлауынса, Көньяҡ Урал һәм Урал алды, Урта Урал менән сағыштырғанда, сейсмик яҡтан хәүефһеҙерәк. Дөрөҫ, 1989 йылдың апрелендә Алабуғала булып үткән ер тетрәү сейсмологтарҙың Көньяҡ Урал алды һәм Уралдың сейсмик хәленә булған ҡарашын үҙгәртте. Был — Көнсығыш Европа платформаһының көнсығыш өлөшөндәге һуңғы 75 йыл эсендә булған иң көслө тетрәү.

Шулай итеп, әгәр ҙә Башҡортостанда ер тетрәй ҡалһа, ул 5—6 балл көсөнән дә артмаясаҡ».

Хәйер, «Химпром» берекмәһенең һуңғы сиккәсә иҫкергән ҡорамалдары өсөн ошо әтрәш тә етә. Әйткәндәй, 1990 йылдың 5 февралендә 10 сәғәт 25 минутта Өфөлә Сутолока йылғаһының уң яҡ ярында урынлашҡан Көнкүреш хеҙмәтләндереүе министерствоһы бинаһында һелкенеү булды. Ул, моғайын, убылыу күренештәре һөҙөмтәһелер.

Ҡот осорға нигеҙ юҡ, әммә борсолорға кәрәк. Республика хөкүмәт органдарының тулы тыныслыҡ һаҡлауҙары аптырата. БАССР Госстройы, мәҫәлән, Геология институтының «Көньяҡ Уралдың һәм Урал буйының сейсмик райондары» тигән темаға фәнни-тикшеренеү эшен раҫламаған. Геологик һынауҙар үткәреү урыны ла тыйылған. Ә ул бынан 7 йыл элек Күгәрсен районының Мораҙым ауылы янында төҙөлөргә тейеш булған.

Бушҡа өмөтләнергә генә ҡала түгелме? Әйткәндәй, Э. И. Несмеяновичтың ошо көндәрҙә Геология институты саҡырыуы буйынса Өфөгә килеүе бар, ул саҡта беҙ уҡыусыларға стихиялы афәттәрҙе алдан билдәләү методы хаҡында ентеклерәк тә һөйләй алырбыҙ.

Ошондай уҡ эш менән Мәскәүҙән фән докторы В. Иваненков та шөғөлләнә. (Уның мәҡәләһе «Военные знания» журналының 3-сө һанында урынлаштырылған). «Красная Звезда» гәзитәһы хәбәрсеһе В. Пасякиндың түбәндәге фекере менән дә килешергә мөмкин. Ул — «Гореть ли Черному морю?» тигән мәҡәлә авторы (1990, 14 март): «Совет ғалимдары Иваненков һәм Несмеяновичтарҙың прогноздары — кеше ҡурҡытыу өсөн түгел, ә ошо йүнәлештәге ғилми-тикшеренеү эштәрен активлаштырыу маҡсатында».

Әммә ниңә беҙ шулай бик йәһәт һәм бер төрлө ҡаршылыҡһыҙ төрлө имеш-мимештәргә ышана һалып барабыҙ һуң? Совет кешеһенең әлегә социаль һәм тәбиғәт ҡазалары алдында үтә яҡлаусыһыҙ, һаҡлауһыҙ булыуынан түгелме?

С. ҒАФУРОВА.

СПОРТ

«ТӘМЛЕ» ЯРЫШТАР

ИРТӘ менән байрам төҫө алған спорт майҙансығында, шау ҙа гөр килеп, студент халҡы ҡайнаша. Башҡорт дәүләт университетында йыл һайын үткәрелә торған традицион «ҡыш оҙатыу» йолаһы алты ятаҡ араһындағы иң күңелле байрамға әүерелә, студенттарҙың йыйылма командалары етеҙлектә, оҫталыҡта, тапҡырлыҡта үҙ-ара көс һынаша.

Байрамды спорт клубының председателе Н. С. Сенюков асып ебәрҙе. Үҙенең ҡыҫҡа телмәрендә университеттың тоғро традицияларын, йолаларын, иң яҡшы спортсмендарын атап үтте һәм студенттарға уңыштар теләне.

Стартта — филология факультетының 1-се дөйөм ятаҡ студенттары. Уларҙан һуң башҡа командалар ҙа бер-бер артлы көрәшкә ҡушыла. Көсөргәнешле минуттар... Көйөрмәндәрҙең йөрәк тибештәре һуңғы секундтарҙы иҫәпләй... Һәм — һауаны филологтарҙың көслө «ура» тауыштары яра. Беренсе ярышта уҡ алға сығыу тел белгестәренә илһам өҫтәне, ахыры, «Һайт» та «һоп» килеп, дуҫтарың ҡеүәтләп торғанда (һүҙ өсөн кеҫәләреңә тығылып бармайҙар шул!), нисек сәмләнмәйһең инде... Ярыш ос сәғәт буйы барҙы. Эстафеталар араһындағы ҡыҫҡа ғына тәнәфестәрҙә алдан әҙерләнгән, береһенән береһе мауыҡтырғыс музыкаль сығыштар башҡарылды. Әйе, көйәрмәндәр ҙә ҡоро тамаша ҡылып тороу менән генә килешмәнеләр, үҙҙәренең йырға, бейеүгә оҫталыҡтарын да күрһәтеп, байрамға йәм өҫтәп, командаларына таяныс булып торҙолар.

Ярыш ҡыҙғандан-ҡыҙа барҙы: бәхет йә бер, йә икенсе командаға йылмайҙы, еңеүселәр ҙә алмашынып ҡына торҙо. Шулай ҙа 1-се дөйөм ятаҡ командаһы ойошҡаныраҡ, етеҙерәк булып сыҡты. Филологтарҙың иң актив спортсмендары Р. Монасипов, В. Ҡунафин, Р. Ишмурзина, Р. Вилдановтарҙың тырышлығы командаға бик күп ҡиммәтле очколар алып килде һәм еңеүгә булышлыҡ итте лә инде. Уларға I урын һәм «тәмле» приз — 6 торт бирелде. II һәм III урындарҙы 4-се һәм 5-се ятаҡтарҙың командалары үҙ-ара бүлеште.

Әлбиттә, был яҙ байрамы студенттарҙың күңелендә онотолмаҫ хәтирәләр ҡалдырыр һәм әсе тир түгеп яуланған еңеүҙән һуң, тәмле торттар менән сәй эсеүҙәр тәнгә сихәт, йәнгә ләззәт бирер, киләһе ярыштарға тиклем ярһыуҙарҙы бер аҙ баҫып торор кеүек...

Н. ХӨББӨТДИНОВ,
БДУ студенты.

Иғландар

7-се СПТУ 8, 9, 10 класс белемле егеттәрҙе һәм ҡыҙҙарҙы түбәндәге һөнәрҙәр буйынса уҡырға саҡыра:

ташсы-монтажсы, электросварщик, маляр-штукатур, йөҙләүсе, ҡулдан сваркалау электросварщигы, сәскә үҫтереүсе-декоратор, йөҙләүсе-плитасы, төҙөлөш столяры, балта оҫтаһы, ташсы, мейес сығарыусы, штукатурсы.

Урта белемле уҡыусыларға айына 90 һум стипендия түләнә, 8 класс белемлеләр дәүләт тәьминәтендә тора.

Ситтән килеүселәр бөтә уңайлыҡтары булған дөйөм ятаҡ менән тәьмин ителә.

Түңәрәктәрҙә һәм секцияларҙа шөғөлләнергә теләүселәр өсөн бөтә шарттар тыуҙырылған.

Уҡыу ваҡыты хеҙмәт стажына индерелә. Уңышлы уҡыған уҡыусыларға мораль һәм материаль дәртләндереүҙәр ҡаралған.

Уҡырға инеү тәртибе бөтә училищелар өсөн дөйөм.

Документтар 1 июндән 30 августҡа тиклем ҡабул ителә.

Адресы: Өфө, Чернышевский урамы, 47. Телефон: 22-36-64.

4, 5, 7, 9, 16-сы трамвайҙары менән «Красин урамы» туҡталышына тиклем барырға.

●

Халыҡты эшкә урынлаштырыу буйынса республика үҙәге ҡатын-ҡыҙҙарҙы түбәндәге специальностар буйынса Өфө һөт комбинатына эшкә саҡыра: эремсек, май, ҡаймаҡ бешеүсе, диетик аҙыҡ-түлектәр эшкәртеү, һөттө ҡуйыртыу буйынса аппаратсылар, иретеп яһалған сыр эшләүсе.

Эш хаҡы 180 һумдан алып 280-гә тиклем. Эш ике сменалы һәм график буйынса (ике көн эшләп, ике көн ял итәһең).

Комбинаттың ике ял итеү базаһы, пионер лагеры бар, 280 урынға иҫәпләнгән балалар баҡсаһы төҙөлә.

Эшкә урынлаштырыу бюроһына түбәндәге адрестар буйынса мөрәжәғәт итергә: Ульяновтар урамы, 36 йәки һөт комбинатының кадрҙар бүлегенә (Интернациональ урамы, 129а, транспорт менән «УМЗ һарайы» туҡталышына тиклем барырға.

●

ТУҠЫУ ПРОМЫШЛЕННОСЫНЫҢ ХЕҘМӘТ ҠЫҘЫЛ БАЙРАҠ ОРДЕНЛЫ КРАСНОВОЛЖСКИЙ КИЗЕ-МАМЫҠ КОМБИНАТЫНЫҢ

37-се ПРОФЕССИОНАЛЬ-ТЕХНИК УЧИЛИЩЕҺЫ

уҡырға саҡыра

15 йәштән 20 йәшкә тиклемге, VIII—X класс белемле ҡыҙҙар түбәндәге һөнәрҙәр буйынса ҡабул ителә: еп иләүсе, туҡыусы, тегеҙләүсе, кәләпләүсе, туҡымаларҙы эшкәртеүсе, сифатты тикшереүсе.

Училищеға уҡыусылар 25 июндән 1 сентябргә тиклем ҡабул ителә.

Түбәндәге документтарҙы тапшырырға кәрәк: белем тураһында таныҡлыҡ йәки аттестат, паспорт йәки тыуыу тураһында таныҡлыҡ, йәшәгән урында иҫәптән төшөү тураһындағы мисәт һуғылған листок, мәктәптән характеристика, 286/у формаһындағы медицина справкаһы, 3×4 см ҙурлығындағы 6 фотокарточка.

VIII класс нигеҙендә училищела — 3 йыл, X класс нигеҙендә 1 йыл уҡырға.

VIII класс нигеҙендә ҡабул ителгән уҡыусылар училищены тамамлағандан һуң урта белем ала. Уҡыусыларға 70 һум стипендия бирелә, түләүһеҙ ос тапҡыр туҡланыу, бөтә уңайлыҡтары булған дөйөм ятаҡтан урын менән тәьмин ителә.

Комбинат эргәһендә киске туҡыу техникумы бар. Училище уҡыусылары техникумға конкурсһыҙ алына.

Комбинатта еп иләүселәр 200 һумдан 250 һумға тиклем, туҡыусылар 200 һумдан 300 һумға тиклем һәм унан да күберәк хеҙмәт хаҡы ала.

Училищеның адресы: **155400, Кинешма ҡалаһы, 10, Иваново өлкәһе, Красноволжский кизе-мамыҡ комбинаты, ПТУ, Веснин урамы, 6. Директорға.**

• Бөгөн Халыҡ-ара театр көнө

ЮҒАЛТМАЙЫҠ ҠОТОН ТОЛПАРҘЫҢ

(Премьеранан һуң уйланыуҙар)

Ошо көндәрҙә Салауат башҡорт дәүләт драма театры коллективы йәш әҙип Флорид Бүләковтың «Атылған өйөр» пьесаһын сәхнәләштерҙе. Яңы спектаклде тамашасылар йылы ҡабул итте, уны авторҙың да, театр коллективының да уңышы тип баһаларға мөмкин.

Әҫәрҙә Толпар — ҡанатлы ат — төп образ: театрҙың баш режиссеры Гөлдәр Ильясова әйтмешләй, был драмала бөтә хәл-ваҡиға халыҡ яҙмышы аша үҫтерелә, төйнәлә һәм сиселә.

Билдәле, XX быуаттың һуңғы ун йыллығының башы көнсығыш халыҡтарының боронғо календары буйынса Йылҡы йылы тип атала. Быуаттар буйынса малсылыҡ менән шөғөлләнгән башҡорт халҡы йылҡы малын изгеләштергән, уны ҡот килтереүсе изге йән тип иҫәпләгән. Ата-бабабыҙ аттың ҡотон һаҡлауҙы бурысы итеп һанаған, йылҡы малын һатҡан осраҡта ла уның ялының йәки ҡойроғоноң бер нисә бөртөк ҡылын өҙөп алып ҡалыр булған. Халҡыбыҙҙың аттарға ҡарата ҙур ихтирамы, уға тотем итеп табыныуы ауыҙ-тел ижадында ла асыҡ сағыла.

Башҡорттарҙың бай һәм оҙон тарихында тоғро юлдаш булған толпарҙар, аҡбуҙаттар, арғымаҡтар, автор колхоз ауылының һуңғы 40—45 йылын ғына һүрәтләһә лә, «Атылған өйөр» әҫәрендә асыҡ кәүҙәләндерелә. Спектаклдә хәл-ваҡиғалар донъяның әсеһен-сөсөһөн татыған, күпте күргән башҡорт атының рухы аша күрһәтелә.

Толпар (уны танылған сәхнә оҫтаһы, РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисы Илшат Йомағолов уйнай) үҙенең ҡәһәрле үткәнен хәтерләй: колхоз комсоргы Бәғҙәнур уға беренсе ҡамсы күтәргән, ваҡыт икеһен дә аямаған: Толпарҙың ғүмерен киҫкәндәр, ә Бәғҙәнурҙың сәстәре салланған. Ат рухы ошо әҙәм яһаған хата аҙымдарҙы һөйләп бирә. Был ҡара эсле кеше үҙен, дөрөҫ йәшәп ғүмер уҙғарҙым, тип иҫәпләй, йәғни, ул колхоз комсоргы, район вәкиле һәм райком инструкторы кеүек вазифалы урындарҙа эшләгән саҡта халыҡ мәнфәғәтен ҡайғыртҡан.

Спектакль 1941 йылдың июнь ваҡиғаларын кәүҙәләндереүҙән башлана. Һайыҫҡан урамында яҙылмаған ҡанун йәшәп килә: егет үҙенең һөйгән ҡыҙын түйләп түгел, урлап ҡайтырға тейеш. Шулай булмаһа — ул егет түгел! Айсыуаҡ та (был ролде БАССР-ҙың атҡаҙанған артисы Рим Зыяэтдинов башҡара) ошо йоланан тайпылмаҫҡа ҡарар итә, яратҡаны Ыңйыҡайҙы Толпар аты эйәренә ултыртып алып ҡаса.

Түрәләргә ярамһаҡланырға ратҡан һәм шул юл менән уларға ярарға тырышҡан колхоздың комсомол ойошмаһы етәксеһе Бәғҙәнур (БАССР-ҙың атҡаҙанған артисы Рауил Гәлин) ошо мажаралы хәлдән файҙаланып, үҙенең сираттағы хаслығын ҡылырға ниәтләнә. Ыңйыҡайҙы кәнсәләргә саҡыра, уға иҫке йолаларҙың зарары хаҡында аҡыл өйрәтә. «Ҡыҙ урлап, коммунизм төҙөп буламы?» — тигән һорау ҡуя. Айсыуаҡты милләтселектә ғәйепләп, вәлидовсы тигән ярлыҡ таға һәм уның өҫтөнән Ыңйыҡайға ялыу яҙырға тәҡдим итә.

Йәш комсомолка был әтләктән баш тарта. Әммә мәкер оҫтаһы Бәғҙәнур был юлы ла юғалып ҡалмай, Айсыуаҡ менән Ыңйыҡайҙы комсомолға ҡаршы йәшерен ойошма төҙөүҙә ғәйепләй, ҡыҙҙың атаһын «таш ҡапсыҡҡа» ебәреү менән янай. Атаһын йәлләгән ҡыҙ илай-илай ялыу яҙырға мәжбүр була.

Ошо мәлдә республикала малдарҙың үләт сире тарала. «Юғарынан» күрһәтмә буйынса ғына йәшәгән Бәғҙәнур был юлы ла ҡайҙалыр «өҫтә» ултырған Иван Аркадьевич бойороғона тоғро ҡала, колхоздың бөтә аттары йоғошло тип хәбәр тарата ла, тикшереп-фәлән итеп тормайынса, бар йылҡы өйөрөн үҙ ҡулдары менән ата. Был ҡот осҡос хәл Бөйөк Ватан һуғышы башланыр алдынан була.

Колхозда бөтә ауырлыҡ ҡатын-ҡыҙ, бала-саға, ҡарт-ҡоро, һуғыштан яраланып ҡайтҡан ир-ат елкәһенә төшә. Тоғро юлдашы яуҙа һәләк булғас, Толпар тыуған төйәгенә әйләнеп ҡайта. Уға ла кос еткеһеҙ эш йөкмәтәләр. Хәле бөтөп ауғас, уның урынына Ыңйыҡайға егелергә тура килә. Ошондай ауыр мәлдә лә Бәғҙәнур ярамһаҡланыуҙан туҡтамай, Иван Аркадьевичҡа: «Нисә ат кәрәк, шул тиклем бирербеҙ», — тип ғәҙәҙә биреүен дауам итә. Бындай тоғролоғо өсөн ул орденға «лайыҡ» тип табыла.

Берҙән-бер көндө Ыңйыҡай егеп йөрөгән Толпар юғала. Быны белеп ҡалған Бәғҙәнур Ыңйыҡайҙан атты таптыра һәм уны ҡурҡытыу өсөн карабиндан атып ебәрә. Әмәлгә ҡаршы, пуля Сталин портретына барып ҡаҙала. Ә Толпарҙы һуғыштан ҡайтып, председатель булып эшләп йөрөгән Айсыуаҡтың алып китеүе — район үҙәгенә барып ҡайтыуы асыҡлана. Ул яраланған портретты кеше-ҡара күрмәҫ борон яғырға ҡуша.

Замандар үҙгәреп, XX съезда шәхес культы фашланғас, райком инструкторы дәрәжәһенә үрләгән Бәғҙәнур: «Сталин портретына үҙе иҫән саҡта уҡ беренсе булып аттым, был хаҡта бөтә республика белә», — тип күкрәк һуға.

Сиҙәм ерҙәрҙе үҙләштереү башланғас, колхоздағы һуңғы болонлоҡтар һөрөлә, быға ҡаршы сыҡҡан Айсыуаҡ эшенән алына һәм әскелеккә бирелә.

Шәхес культы, торғонлоҡ йылдарындағы бындай аяныслы хәлдәрҙе беҙ билдәлелек осоронда ғына аңлай башланыҡ, сөнки уға тиклем халыҡ өнһөҙ булды. Ыңйыҡай Толпарға быны шулай аңлата: «Дәһшәтле ваҡиғаларҙан һуң мин дә һинең кеүек телһеҙ ҡалдым».

«Атылған өйөр»ҙә Ыңйыҡай — берҙән-бер ҡатын-ҡыҙ роле. Беҙ уның йәш сағын, Бөйөк Ватан һуғышы осоронда тәртәгә төшкән егелеүен, ҡара сәстәренә сал төшкән сағын күрәбеҙ. Тормошоң уты-һыуы аша үтһә лә, рухын һындырмаған, көслө ихтыярға һәм саф йәшлек мөхәббәтенә тап төшөрмәгән кеше ул. Был ҡатмарлы образды БАССР-ҙың атҡаҙанған артисткаһы Кинйәбикә Исламғолова тормошсан һәм тулы ҡанлы, тамашасыларҙы ышандырырлыҡ итеп ижад иткән.

Бөтә ил уңыштар хаҡында «өҫкә» рапорт бирә, ә «түбәндә» вайымһыҙлыҡ, әскелек хөкөм һөрә. Замана балаһы, юлдан яҙып барған Табылдыны йәш артист Илдар Вәлиев торғонлоҡ осоро йәштәренә хас характерҙа асып биргән. Аллабирҙе ҡарт (БАССР-ҙың атҡаҙанған артисы Фуат Әминев) тормошо тамашасыларҙы көлдөрөп кенә ҡалмай, о диндең, ололарҙың йәштәрҙе тәрбиәләүҙәге урынына баһа бирел еткермәү ниндәй һөҙөмтәләргә килтергәне хаҡында ла уйланырға мәжбүр итә.

Бына сәхнәлә — үҙгәртеп ҡороу осоро. Йәш Табылды ла ҡурҡмай һөйләшергә өндәй. «Беҙҙә хәҙер — гласность!» — тип шатлана. Сәстәренә сал төшкән Ыңйыҡай ҙа үҙ бәхетен тапҡан кеүек — ул йәшлек мөхәббәте Айсыуаҡ менән бергә буласаҡ. Әммә бәхет уға был юлы ла тиҫкәре ҡарай. Бынан тиҫтәләгән йылдар элек Айсыуаҡ өҫтөнән яҙған ялыуҙы Бәғҙәнур табып, үҙенә генә хас «тоғролоҡ» менән райкомға ебәрә, унан — парткомға. Колхоздың партия комитеты ағзалары, ялыу ҡағыҙының мәғәнәһе ҡалмаған, тип уны Айсыуаҡҡа бирә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был хәл Айсыуаҡтың яҡты донъянан китеүенә сәбәпсе була.

Ошондай ҡатмарлы, ауыр һәм аянысли хәлдәр тураһында һөйләй өлкән башҡорт аты рухы. Уның фекерләүе, хәл-ваҡиғаларҙы баһалауы, уларға ҡарашы аша беҙ илебеҙ кисергән дүрт дәүерҙе: шәхес культын, Хрущев ваҡытындағы «иреү» миҙгелен, торғонлоҡ йылдарын, үҙгәртеп ҡороу осорон күҙ алдына баҫтырабыҙ. Режиссер Гөлдәр Ильясова әҫәрҙең ошо төп идеяһын тамашасыға еткереү өсөн күп көс һалған. Халҡыбыҙҙың үлемһеҙ символы — Толпар ҡотон бөгөнгө көндә юғалтып ҡуймайыҡ, тип иҫкәртә спектакль. Бына шул яғы менән дә бик әһәмиәтле ул.

С. ӘМИРОВ,
инженер-конструктор.
Мәләүез.

АВТОРҘАН: Мәҡәлә өсөн гонорарҙы ситт өлкәләрҙә йәшәүсе милләттәштәремә «Йәшлек» газетаһына яҙылыу өсөн бүлек итәм.

МАХСУС ДӘРЕСЛЕК КӘРӘК

Башҡортостандың тарихы буйынса һүҙем бар ине. Уҡыусылар мәктәп дәреслектәре аша Америка, Германия, Франция һәм башҡа дәүләттәрҙең тарихы тураһында шаҡтай бай төшөнсә ала. Ә үҙебеҙ йәшәгән, көн иткән Башҡортостандың тарихын төрлө-төрлө мәғлүмәттәрҙән бик яҡынса ғына күҙ алдына килтерәбеҙ. Ә бит беҙҙең тарихсы ғалимдарыбыҙ был хаҡта күпме ғилми хеҙмәт яҙған, күпме кандидатлыҡ, докторлыҡ диссертациялары яҡлаған?! Беҙҙеңсә, бындай ғилми хеҙмәттәр халыҡ өсөн, халыҡ хужалығын, культураһын алға ебәреү өсөн эшләнелә бит. Бындай тарихи хеҙмәттәрҙә сер юҡтыр тип уйлайым. Улар тураһында телевизор аша Башҡорт дәүләт университеты профессоры И. Аҡманов та әсенеп һөйләгәйне.

Шуға күрә, һис кисекмәҫтән, ғалимдарыбыҙға Башҡортостан тарихы, культураһы хаҡында дәреслекте әҙерләп, китап итеп, Башҡортостан китап нәшриәтендә баҫтырып сығарыу сараһын күрергә *кәрәк, уның тира*жы ла һәр уҡыусыға, һәр ғаиләгә, ҡыҙыҡһыныусыға етерлек күләмдә булырға тейеш.

Ә инде мәктәптәрҙә һәм башҡа уҡыу йорттарында был бик мөһим һәм ҡәҙерле ҡулланма буласаҡ.

Башҡорт яҙыусылары, шағирҙары тураһында китап бар. Әммә башҡорт милли культураһын үҫтереүсе сәхнә оҫталары, артистарыбыҙ, художниктарыбыҙ хаҡында ла берәй ҡулланма донъя күрһә яҡшы булыр ине.

В. ХӨСӘЙЕНОВ.
Стәрлетамаҡ.

Күптән түгел Дүртөйлө ҡалаһында «Яҙ—90» исемендә театр фестивале булып үтте. М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры коллективы Т. Миңнуллиндың «Диләфрүзгә дүрт кейәү» музыкаль комедияһын күрһәтте.

ҺҮРӘТТӘРҘӘ: Диләфрүз (БАССР-ҙың атҡаҙанған артисткаһы Т. Бабичева) менән Сажиҙә (М. Хәйруллина); кейәүҙәр: Шәкүр (БАССР-ҙың атҡаҙанған артисы Ф. Бакиров), Ғәлим (РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисы Ш. Рәхмәтуллин), Исмәғил (РСФСР-ҙың халыҡ артисы Ф. Ғафаров) һәм Йәмил (И. Ғүмәров).

Р. МӨХӘМӘТОВ фотолары.

«Йәшлек»
ВЛКСМ-дың Башҡортостан
Өлкә Комитеты органы

БЕҘҘЕҢ АДРЕС:
450079, Өфө, Октябрҙең
50 йыллығы урамы, 13, 8-се
ҡат.
Телефондар: 23-46-38,
22-56-45.

Газета шишәмбе, кесаҙна,
шәмбе көндәрендә башҡорт
телендә сыға.

Индексы — 50604.

Редакторы Б. НАЗАРҒОЛОВ.

КПСС-тың Башҡортостан Өлкә Комитеты нәшриәте типографияһы.

П03357. Заказ № 476.